3°. Special words, such as onomatopoeic particles: кикрикүк тип ҡысҡырҙы "he crowed 'cock-a-doodle-doo!"

6.4. Combination of clauses.

There are two types: coordinate and subordinate clauses.

6.41. Coordination.

There occur two types of coordinate clauses: 1. without conjunctions and 2. with conjunctions.

6.411. Coordination without conjunctions: убыр китте, урыны ҡалды "the glutton is gone, his place is vacant"; килен булдым, ҡәйнәгә ярамаНым "I became a daughter-in-law, I did not please the mother-in-law"; сер дуҫы күп булыр, серҙе тотҡан бер булыр "there are many lovers of secrets, there is [only] one who keeps a secret"; ер соҡорһоҙ булмаҫ, урман кейекһеҙ булмаҫ "the earth is not without uneveness, the forest is not without wild animals"; тапҡан һөйөнгән, таныған алған "the one who had found rejoiced, the one who had recognized [it] took [it]"; һаҡалға ышанма, аҡылға ышан "do not believe the beard, believe the intellect!"; ауыл иртәнге томан аша саҡ ҡына күренә,

тау түпәләрендә аҡ болоттар хәрәкәтһеҙ торалар ине "the village was hardly seen in (lit. "through") the morning fog, on the mountain peaks white clouds were standing motionless"; мин бер аҙ торған инем, ерҙе аҙ-маҙ тырмалап сәскән инем, урған инем "I used to live [there], raking the soil a little bit, I sowed, harvested"; хөҙрәт асылғандан-асылды, ҡыҙғандан-ҡыҙҙы "the mollah became more and more frank, more and more excited"; осоп барып күрер инем, йәнем күбәләк түгел "I would fly [there] and look [but] my soul is not a butterfly"; юҡҡа унда киткән, бында эш булыр ине "he went there unnecessarily (lit. "for nothing"), [because] work would be [found] here".

### 6.412. Coordination with conjunctions.

1°. Conjunctions used in coordinate clauses are /häm/ "and"; /šulay uq/ "likewise"; the particle /LÄ/; /läkin/ or /ämmä/ "but"; /ä/ "but"; /yuqha/ "otherwise, or else"; /tik/ "only"; /yä/ or /yäkəy/ "or": мин йөҙөнә ҡараным да ултырҙым "I was looking at her face and sitting [there]"; мин ҡая башында баҫып торған бер ҡоралай күрҙем һәм атырға уйланым "I saw a wild goat standing at the top of the rock and I intended to shoot at it"; кискә табан беҙ ҡайтып китергә йыйындыҡ, ләкин ҡунаҡсыл хужа беҙҙең ҡунып китеүебеҙҙе бик ныҡ үтенеп һораны "towards the evening, we reddied ourselves to go back but our hospitable landlord asked us very insistingly to stay the night [at his home]"; өс кәмә пассажирҙәр менән шығырым тулы ине инде, ә ике кәмә буш тора ине әле "three boats were already filled with passengers, but two were [still] standing unoccupied"; ул кисә килгән, ләкин мин уны күрмәнем "he came yesterday but I did not see him"; хәҙер үк ҡуҙғалайыҡ, юҡһа һуңларбыҙ "let us get moving right now or else we shall be late"; Шәрифә әбей күҙен бер аҙ асты. Томаланған күҙҙәре менән иренә ҡараны, ләкин уны таныманы "Grandma Sharifa opened her eyes a little bit. She looked with her hazy eyes at her husband but did not recognize him".

2°. Instead of a conjunction, some other word linking a clause to another one may be used: Иң тәүҙә лекция булды, шунан һуң концерт булды "first there was a lecture, after it there was a concert".

### 6.42. Subordination.

### 6.421. Subordinating conjunctions.



Clauses are subordinated by means of the following subordinating conjunctions:

1°. /sönkəy/ "because": һин миңә килмәнең, сөнки эшең күп булды "thou didst not come to me because thy work was much"; ашап алдым, сөнки бик асыҡҡайным "I ate because I had become very hungry"; баҡсаға һыу һипмәнем, сөнки кисә ямғыр яуған ине "I did not water the vegetable garden because it had rained yesterday".

2°. /güyä/ "like, as if";

3°. /ägär/ "if, when" with the conditional functioning as the predicate of the subordinate clause: әгәр һеҙ улығыҙҙы ебәрмәһәгеҙ, мин бер үҙем китәм "if you do not let your son go, I shall leave by myself"; әгәр буран тынмаһа, мин юлға сыҡмаясаҡмын "if the blizzard does not calm down, I shall not go out upon a travel"; әгәр өлгөрһәм, был китапты уҡып сығам "I shall read this book if I can make it".

4°. /ägär-ðä/ "if" ( = English _if_ with the conditional or subjunctive): әгәр ҙә эш барып сыҡмаһа, мин иртәгә кире ҡайтып китәм "if the work should not come out, I shall go back tomorrow"; әгәр ҙә һин шунда хәйләне оҫтараҡ ҡорһаң ине, ул ваҡытта беҙ уларҙың ҡулдарына эләкмәгән дә булыр инек "if thou hadst performed thy tricks in a manner more skillful, we should not have fallen into their hands at that time".

5°. /gärsä/ гәрсә "although";

6°. /kəy/ "that": шул тиклем моңло итеп уйнап ебәрә ки һәр бер ауырыу дәртләнеп һауыға башлай "he starts playing so melodiously that every patient cheers up and begins to recuperate".

### 6.422. Interrogative nouns, adjectives, and adverbs.

The interrogative nouns, adjectives, and adverbs, such as ни "what"; ни тиклем "how much"; ниндәй "what kind of"; нисек "how much", etc., followed by the conditional and the particle /LÄ/, function like the English _no matter what_, _no matter how much_, _no matter how_, etc.: ул ни тиклем тырышһа ла, бер нәмә лә ала алманы "no matter what efforts he made, he was unable to get anything"; ә һеҙ, дуҫтар, нисек кенә ултырһағыҙ ҙа, бары бер музыкантлыҡҡа ярамайһығыҙ "but you, [my] friends, no matter how you sit, you are unfit to be musicians"; ниндәй генә эш эшләмәксе булһаң да, эшең үҙенән-үҙе эшләнер "no matter what kind of work thou wilt have to do, thy work will be done by itself!"

6.423. Subordination without conjunctions or any special words.

1°. A conditional clause with the conditional functioning as its predicate needs no conjunction or interrogative, to become a subordinate clause: иртәгә уҡыу булмаһа, экскурсияға барабыҙ "if there will be no lessons tomorrow, we shall go on an excursion"; ваҡытың булһа, һин миңә килерһең "if thou hast time, thou wilt come to me".

2°. A concessive clause with the conditional functioning as its predicate and followed by the particle /LÄ/ "although" needs no conjunction either: ҡарттың улы бәләкәй булһа ла, аҡылы етеҙ "although the old man's son is little, his intellect [is] keen"; үзең яңы ҡабыҡта булһаң да, йөрәгең әүәлгесә "although thou art in a new shell, thy heart [is the same] as before"; саҡырһам да, риза булманы "although I invited [him, he] did not consent".

6.424. Direct discourse.

The direct discourse is juxtaposed to the main clause and may (or may not) be connected with the main verb other than /ti-/ "to say" by means of the gerund /tip/ "saying": һеҙҙе унда кем һәм ни нәмәгә өйрәткәндер, белмәйем "I do not know who taught you what there"; туйған ерҙән туған ер яҡшы тиләр "they say the birth place is better than the place where one has become satiated"; ас баҙ ҡапҡасын, - тине Сафа ҡарт "'open the lid of the cellar,' said the old man Safa"; тырыш, балам, беҙҙе онотма, - тип күҙен һөртеп ҡуйҙы 'make efforts, my child, do not forget us', saying [this, the mother] wiped her eyes"; хуш бул, - мин әйтәм, - тыуған илем Башҡортостан, хуш булығыҙ киң сәхрәләрем "good-bye, I say, my native country Bashkirstan, good-bye, my wide open spaces!"; алдамаҫҡа!, - тип ҡысҡырҙы Озеров "Ozerov (a name) yelled - "No lies!"; ултырығыҙ - тине комиссар йылмайып "'sit down', said the commissar smilingly"; тот, тот мине, тот! - тип ҡасалар "they run away, saying 'Catch me, catch!'"; һәм Фуаттың арҡаһынан һөйөп: киттек, - тине "and stroking Fuat's spine, he said: 'Let us go!'" (lit. "off we went!"); Назим Хикмәт.... төрөк халҡына былай ти: „Йә алданыу, йә алданмау - бына мәсьәлә" "Nazim Hikmet [thus] speaks to the Turkish people: 'to be deceived or not to be deceived - this is the question.'"

# II. TEXTS

Б. ЮЛДАШБАЕВ

# БАШҠОРТ АССР-ының ТӨҘӨЛӨҮЕ

*Тарихи очерк*

БАШКОРТОСТАН КИТАП ИЗДАТЕЛЬСТВОҺЫ
Өфө — 1959

## Һ Ө Ҙ Ө М Т Ә

Башҡортостан Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының барлыҡҡа килеү һәм формалашыу осоро 1917 йылдан, Россия халыҡтары хоҡуҡтарының Декларацияһын иғлан иткән Октябрь революцияһы еңгән моменттән алып 1925 йылға, Башҡортостан Автономияһының территория сиктәре тамам асыҡланғанға һәм Башҡорт АССР-ының Конституцияһы эшләнгәнгә тиклем дауам итте.

1917—1918 йылдарҙа автономиялы совет Башҡортостанының беренсе проекттары, мәҫәлән, Башҡортостан Ваҡытлы революцион советының проекты һәм Татар-Башҡорт совет республикаһының проекты төҙөлдө. Тәүге проект ул саҡтағы шарттарҙа өлгөрөп етмәгән булып сыҡты, ә икенсеһе башта Коммунистәр партияһы тарафынан яҡланһа ла һуңынан уның Совет государствоһының политикаһына ҡаршы килгәнлеге асыҡланды һәм шуға күрә ғәмәлдән сығарылды.

Башҡортостан автономияһы тарихендәге артабанғы, хәл иткес этап 1919 йылдың 20 мартында Үҙәк Совет власе менән Башҡортостан хөкүмәте араһында төҙөлгән Килешеүгә бәйләнгән. Был Килешеү Башҡорт АССР-ының йәшәй башлауын билдәләне.

Башҡортостан территорияһы аҡгвардеецтәрҙән азат ителгән һәм Башревком эвакуациянан (1919 йылдың август айында) Стәрлетамаҡҡа ҡайтҡан моменттән алып 1919 йылдың 20 мартындағы Килешеү нигеҙендә



Башҡорт АССР-ын, уның идара органдарын практик рәүештә ойоштороу осоро башлана.

Ойоштороу осоро Башревком милләтселәренә ҡаршы көрәш менән бара. 1920 йылдың ғинуар айында милләтселәр көс ҡулланыу юлы менән партия Өлкә комитетен алып ташларға маташҡандан һуң, был көрәш үҙенең яңы стадияһына инә.

Башҡортостан Автономиялы республикаһы органдары менән Россия федерацияһы органдарының үҙ-ара мөнәсәбәттәре тураһында РСФСР хөкүмәтенең 1920 йылдың 19 майҙағы декрете милләтселәрҙең һуңғы ышанысын юҡҡа сығарҙы; әгәр ҙә улар быға тиклем 1919 йылдың 20 мартындағы Килешеүҙе милләтселек һәм сепаратизм рухында аңлатырға маташҡан булһалар, хәҙер Башҡортостан автономияһы тураһындағы, уның идара органдары тураһындағы мәсьәләгә тулы асыҡлыҡ индерелде. Был милләтселәр өсөн ҡаты удар булды. Үҙҙәренең сепаратистик политикаһы шулай емерелеүгә осрағандан һуң, иң актив башҡорт милләтселәре ҡасып китергә мәжбүр булдылар.

Вәлидовсыларҙың ҡасып китеүенән, республиканың яңы ревкомын һайлауҙан һәм Советтарҙың I Бөтә Башҡортостан съезын саҡырыуҙан алып башланған артабанғы этап урынындағы милләтселеккә ҡаршы, шулай уҡ великорус шовинизмына тайпылыуға ҡаршы көрәш менән үтте. Һуңғыһы партияның X съезы тарафынан милли мәсьәләлә иң ҡурҡыныслы һәм зарарлы тайпылыу тип танылды.

1922 йылда «Ҙур Башҡортостан» төҙөлөүен һәм унан һуң территория яғынан булып үткән үҙгәрештәрҙе, шулай уҡ Башҡорт АССР-ының беренсе конституцияһы әҙерләнеүен айырым бер этапҡа индерергә кәрәк.

Ошоноң менән ойоштороу осоро, Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының формалашыу осоро нигеҙҙә тамамлана. Дөрөҫ, артабан да Башҡорт АССР-ында административ-территориаль яҡтан күп кенә үҙгәрештәр була әле.

Республиканың яңынан райондарға бүленеүе Башҡорт АССР-ының административ королошонда артабан булып үткән үҙгәрештәрҙең береһе булды. 1930 йылдың август айында кантондар, волостәр бөтөрөлдө һәм Башҡорт АССР-ы дөйөм союз өлгөһөндә административ райондарға бүленде.

1934 йылда Арғаяш кантоны Башҡорт АССР-ынан Силәбе өлкәһенә күсте.

Хәҙер Башҡорт АССР-ы үҙенсә, республика формалашҡан моменттағе кеүек, сиктәре арьяғында (ситтә) урынлашҡан территориялары булмаған, компактлы территориянан тора.

Хәҙерге ваҡытта Башҡортостан административ яҡтан 56 районға бүленә. Бынан тыш, республикала республикаға буйһонған 9 ҡала: Өфө, Стәрлетамаҡ, Октябрьский, Белорет, Ишембай, Салауат, Күмертау, Сибай һәм Бәләбәй ҡалалары бар.

Совет власе йылдарында башҡорт халҡының тормошонда бик ҙур үҙгәрештәр булып үтте. Башҡортостан царизмдең артта ҡалған колонияһынан ныҡ алға киткән промышленносе булған республикаға, алдынғы социалистик ауыл хужалығы булған республикаға әүерелде.

Нефть промышленносе республиканың хужалығында төп урынды тота. Башҡортостан нефть сығарыу һәм эшкәртеү буйынса Советтәр Союзында беренсе урындарҙың берсһен алып тора.

Башҡортостанда машиналар эшләү промышленносе лә ныҡ алға китте. Химия промышленносе барлыҡҡа килде һәм ул йылдам темптар менән үҫә. Металлургия предприятиеләре иң яңы техника менән ҡайтанан ҡоралландырылды һәм киңәйтелде. Күмер промышленносе булдырылды. Ҙур гидроэлектростанциялар һәм йылылыҡ электр станциялары төҙөлдө. Өфө—Стәрлетамаҡ—Күмертау араһында, Миәс менән Учалы араһында яңы тимер юлдар һалынды. Яҡын киләсәктә Башҡортостан территорияһы аша Магнитогорск—Стәрлетамаҡ—Абдуллино тимер юл линияһы үтәсәк.

Ауыр промышленностең үныштары, ауыл хужалығы продукттары етештереүҙең артыуы, шулай уҡ халҡтың ихтыяждары үҫә барыуы Башҡортостанда еңел промышленностең һәм аҙыҡ промышленносенең үҫеүенә сәбәпсе булды. 1959 йылға Башҡорт АССР-ы территорияһындағы промышленностең валовой продукцияһы күләме, 1913 йыл менән сағыштырғанда, 150 тапҡырға тиерлек артты.

Индустриялаштырыу, производствоны механизация яғынан, Башҡортостан ауыл хужалығын да эсенә алды. 1958 йылға тиклем республиканың колхоздарын 133 машина-трактор станцияһы хеҙмәтләндерҙе. Башҡортостанда хәҙерге ауыл хужалығы техникаһы менән ҡоралланған 59 совхоз бар. Машина-трактор станцияларын үҙгәртеп ҡороу һәм колхоздарҙың техниканы МТС-тарҙан үҙҙәренә һатып алыуҙары республиканың ауыл хужалығы производствоһын машиналаштырыу, индустриялаштырыу кимәлен артабан күтәрергә ярҙам итәсәк.



Башҡортостанды индустриялаштырыу һәм уның ауыл хужалығын коллективләштереү Башҡорт АССР-ы рамкаларында ғына сикләнә торған айырым бер процесс булманы. Башҡортостандың халҡ хужалығын реконструкцияларға кәрәклегенә уның эске үҫеше, эске ихтыяждары ғына түгел, бәлки тотош СССР буйынса социалистик төҙөлөш барышы ла сәбәпсе булды. Автономиялы Башҡортостандың Бөтә Россия менән федератив бәйләнештәре социаль-экономик үҙгәртеп ҡороуҙың, хужалыҡ төҙөлөшөнөң, техник прогрестең бөтә мәсьәләләрендә уларҙың берҙәмлеген билдәләне. Бындай тығыҙ контакт үҙенән-үҙе Башҡортостанды промышленность үҫешенең һәм колхоз ҡоролошоноң дөйөм союз процесенә ылыҡтырҙы. Шуға күрә Башҡортостандың экономикаһы дөйөм государство планы буйынса, бөтә илдең тырышлығы менән үҫтерелде һәм үҫтерелә.

Башҡорт милләтенең тормошонда социалистик революция нигеҙендә булып үткән үҙгәрештәр, шулай уҡ был айҡанлы Башҡортостандың Автономиялы республика булыуы яғынан хоҡуҡ хәле Башҡорт АССР-ы Конституцияһында кәүҙәләнде. Башҡорт АССР-ының хәҙерге Конституцияһы СССР-ҙың (1936 йылғы) һәм РСФСР-ҙың (1937 йылғы) яңы конституциялары нигеҙендә эшләнде һәм 1937 йылдың 23 июнендә Башҡорт АССР-ы Советтәренең ғәҙәттән тыш X сессияһында һәм 1940 йылдың 2 июнендә РСФСР Верховный Советы тарафынан раҫланды. СССР, РСФСР һәм Башҡорт АССР-ы Конституцияларына ярашлы рәүештә Башҡортостан «эшселәрҙең һәм крәҫтиәндәрҙең социалистик государствоһы» булып тора һәм үҙенең Верховный Советы һәм Министрҙәр Советы бар; үҙенең гербы, государство флагы, үҙенең башҡалаһы бар һ. б. Быларҙың бөтәһендә лә Башҡорт АССР-ының административ өлкәләрҙән һәм крайҙарҙан юридик айырмаһы кәүҙәләнә.

Башҡортостан, үҙенең Конституцияһында күрһәтелеүенсә, «автономиялы республика хоҡуғы менән РСФСР составына инә»; СССР һәм РСФСР закондары Башҡор-

тостан республикаһы территорияһында мәжбүри; Башҡорт АССР-ы законы менән СССР һәм РСФСР законддары араһында айырылыш булған хәлдә, СССР һәм РСФСР закондары эш итә. Башҡорт АССР-ының юғары органдары ҡарамағына конституция проектын эшләү һәм республиканың эске административ бүленешен билдәләү һәм уларҙы РСФСР Верховный Советының раҫлауына тапшырыу инә. Башҡорт АССР-ының юғары органдары государство тәртибен һаҡлайҙар, республиканың хужалыҡ пландарын һәм бюджетен раҫлайҙар, РСФСР һәм СССР закондарына ярашлы рәүештә, республиканың финанс, һаулыҡ һаҡлау, халыҡ мәғарифе эштәренә, культура-ағартыу учреждениеләренә, суд органдарына етәкселек итәләр һ. б. Башҡорт АССР-ының (Эске эштәр, Һаулыҡ һаҡлау, Мәғариф, Урындағы промышленность, Ауыл хужалығы һ. б.) министерстволары Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советына һәм РСФСР-ҙың тейешле министерстволарына буйһонған хәлдә, государство идараһының үҙҙәренә тапшырылған тармаҡтарына етәкселек итәләр. Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы айырым министерстволар аша урындағы промышленностың предприятиеләрен, республикаға буйһонған ауыл хужалығы, сауҙа предприятиеләрен һәм ойошмаларын идара итә, торлаҡ һәм коммуналь хужалығына һәм төҙөлешенә, урындағы әһәмиәттә булған юл төҙөү эшенә, транспортҡа һәм связьгә етәкселек итә.

Башҡортостан территорияһына урынлашҡан һәм дөйөм государство әһәмиәтендә булған промышленность предприятиеләре һәм башҡа төр хужалыҡ предприятиеләре Башҡортостан административ экономик районының Халыҡ хужалығы советы ҡарамағында торалар. Халыҡ хужалығы советы РСФСР хөкүмәтенең органы булып тора. Ул үҙенең бөтә эшендә туранан-тура РСФСР Министрҙар Советына буйһона һәм уның исеменән эре промышленностың дөйөм федерацияға буйһонған бөтә тармаҡтарын һәм предприятиеләрен идара итә. БАССР Министрҙар Советы үҙенә буйһонған урындағы промышленность предприятиеләре араһында һәм Совнархозға буйһонған союз-республика масштабындағы промышленность предприятиеләре араһында кәрәкле бәйләнештәр урынлаштырыу тураһында хәстәрлек итә, Совнархоз председателенең докладтарын тыңлай һәм бының менән Башҡортостан территорияһындағы промышленносте һәм



төҙөлешкә идара итеүҙә ҡатнаша ала һәм ҡатнашырға тейеш.

Совет биш йыллыҡтары культура төҙөлешенең бөтә участкаларында ҡеүәтле материаль база һәм киң мөмкинлектәр тыуҙырҙы. Улар культура революцияһын хәрәкәткә килтереүсе булдылар.

Яңы, халыҡ интеллигенцияһы тыуыуы Башҡортостандағы культура революцияһының иң мөһим һөҙөмтәләренән береһе булды. Республикала юғары һәм махсус урта уҡыу йорттары асыу быға бик ныҡ булышлыҡ итте. Хәҙерге ваҡытта Башҡортостанда университет, 6 институт һәм 42 махсус урта уҡыу йорто бар.

Республиканың бөтә вуздары башҡорт кадрҙары әҙерләүгә булышлыҡ итәләр. 1957 йылдың ахырына Башҡортостандағы юғары уҡыу йорттарында студенттарҙың милли составы түбәндәгесә булды:

**Башҡорт АССР-ы вуздарында студенттарҙың милли составы**

**(1957 йылдың ахырына)**

| Уҡыу йорттарының исемдәре | Студенттарҙың һаны | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | башҡорттар | татарҙар | рустар | башҡа милләттәр | бөтәһе |
| Башҡортостан государство университете . . . . . . . . . | 449 | 414 | 713 | 124 | 1700 |
| Башҡортостан ауыл хужалығы институты . . . . . . . . . | 315 | 429 | 809 | 157 | 1710 |
| Башҡортостан медицина институты . . . . . . . . . . . . | 464 | 342 | 821 | 184 | 1811 |
| Өфө нефть институты . . . . . | 245 | 212 | 64[illegible] | 106 | 1205 |
| Өфө авиация институты . . . . | 81 | 64 | 485 | 111 | 741 |
| Бөрө государство педагогия институты . . . . . . . . . | 130 | 176 | 296 | 42 | 644 |
| Стәрлетамаҡ государство педагогия институты . . . . . . . | 155 | 133 | 19 | 45 | 528 |
| Бөтәһе . . . | 1839 | 17[illegible]0 | 3961 | 769 | 8339 |

Башҡортостанда культура революцияһының бик ҙур уңышҡа өлгәшкән булыуына ҡарамаҫтан, төп милләттән ғилми кадрҙарҙы бөтә саралар менән үҫтереү кәрәклеге

һис тә кесерәймәй. 1951 йылда Совет хөкүмәтенең СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалын ойоштороуы һәм 1957 йылда Октябрҙең 40 йыллығы исемендәге Башҡортостан государство университеты асылыуы был бурысты уңышлы хәл итеүгә булышлыҡ итәсәк.

Совет власе йылдарында башҡорт халҡының әҙәбиәте һәм искусствоһы ысын-ысындан сәскә атыуға өлгәште.

Башҡорт шағирҙәре Сәйфи Ҡудаштың һәм Мостай Кәримдең, прозаик-яҙыусылар Сәғит Агиштең һәм Әкрәм Вәлидең исемдәре бөтә илгә билдәле. Башҡорт композиторы РСФСР-ҙың атҡаҙанған искусство эшмәкәре Заһир Исмәғиловтың «Салауат Юлаев» операһы башҡорт халҡының музыкаль культураһы үҫеүен күрһәтә. Башҡорт театры хаҡлы рәүештә дан менән файҙалана. Уның сәхнәһендә СССР халҡ артисткаһы З. Насретдинова һәм СССР халҡ артисы А. Мөбәраков кеүек бик яҡшы сәхнә оҫталары үҫеп сыҡты.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың азатлыҡҡа сығыуы башҡорт халҡы тормошонда бик мөһим үҙгәреш булды. Элек хоҡуҡһыҙ булған башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары хәҙер республиканың общественный һәм политик тормошонда актив ҡатнаша. Меңәрләгән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары юғары белемгә эйә булдылар, уларҙың күптәре Башҡорт АССР-ының хөкүмәт органдарында етәксе постарҙа эшләйҙәр.

Башҡортостан — күп милләтле республика. Милләте яғынан да, тыуған теле яғынан да рустар, башҡорттар һәм татарҙар республиканың төп халҡы булып торалар.

Башҡорт АССР-ында йәшәүсе һәр бер халҡтың үҙ телендә хеҙмәтләндереүсе мәктәбе, матбуғаты, культура-ағартыу учреждениеләре бар.

Хәҙерге ваҡытта Башҡортостанда алты телдә — башҡорт, рус, татар, мари, сыуаш һәм удмурт телдәрендә газеталар һәм журналдар сығарыла. Башҡорт телендә 21 газета һәм 5 журнал, рус телендә 68 газета һәм 3 журнал, татар телендә 5 газета һәм 1 журнал сыға һәм башҡалар.

**Республика халҡының 40 проценттән күберәк өлөшөн тәшкил иткән рустар, бөтә Россия федерацияһындағы һәм СССР-ҙағы кеүек үк, Башҡорт АССР-ының тормошонда ла мөһим роль уйнайҙар. Ҡалған бөтә милләттәр улар тирәһенә берләшә. Башҡорт АССР-ының заводтарында һәм фабрикаларында, колхоздарҙа һәм совхоздарҙа башҡорттар, татарҙар һәм башҡа милләт**



хеҙмәтсәндәре рустар менән ҡулға-ҡул тотоношоп эшләйҙәр. Уларҙың биргән тырышлыҡтары һуғышҡа тиклемге биш йыллыҡтар осоронда йөҙәрләгән яңы предприятиеләр төҙөргә, республиканы индустриялаштырырға, ауыл хужалығын социалистик рельскә ҡуйырға мөмкинлек бирҙе. Фашист Германияһына ҡаршы Советтәр Союзының Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында башҡорт халҡының рус халҡы менән һәм Тыуған илебеҙҙең башҡа халҡтары менән дуҫлығы сыныҡты һәм тағы ла күберәк нығыны. Һуғыш берҙәм Совет государствоһы составында беҙҙең илебеҙ халҡтарының тупланғанлығы ни тиклем ныҡ булыуын тағы ла бер тапҡыр күрһәтте. СССР-ҙа йәшәүсе һәр бер халҡ дошманды еңеү эшенә лайыҡлы вклад индерҙе. Рус халҡы көрәштең төп ауырлығын үҙенең елкәһендә алып сыҡты. Меңәрләгән башҡорттар совет ерен немец-фашист илбаҫарҙарҙан азат итеүҙә туранан-тура ҡатнаштылар. 16-сы Башҡорт гвардия кавалерия дивизияһы Волганан алып Эльбаға тиклем героик юл үтте. Был дивизияның 68 һалдатына һәм офицерына Советтәр Союзы Геройы исеме бирелде. Советтәр Союзы Коммунистәр партияһы һәм СССР Халҡ Комиссарҙары Совет Башҡорт АССР-ы төҙөлөүенең 25 йыллығы айҡанлы ҡотлауҙарында былай тип билдәләнеләр: «Немец-фашист илбаҫарҙарға ҡаршы Советтәр Союзының Ватан һуғышы көндәрендә башҡорт халҡы үҙенең Тыуған иле алдындағы патриотик бурысын ныҡ аңлауын күрһәтте. Башҡортостан улдары — Ҡыҙыл Армия воиндәре Ватан өсөн барған һуғыштарҙа башҡорт халҡының данлы боевой традицияларына лайыҡлы булған батырлыҡ һәм ғәйрәтлелек күрһәттеләр»[1].

Советтәр Союзы Коммунистәр партияһы Үҙәк Комитетының һәм Совет хөкүмәтенең ҡарары буйынса 1957 йылдың июнь айында Башҡортостандың үҙ ирке менән Рус государствоһына ҡушылыуының 400 йыллығы байрам ителде. СССР Верховный Советы Президиумы, СССР Министрҙәр Советы һәм Советтәр Союзы Коммунистәр партияһының Үҙәк Комитеты 1957 йылдың 15 июнендә был күренекле байрам уңайы менән Башҡорт АССР-ы хеҙмәтсәндәрен ҡотлап хат ебәрҙеләр. Рус халҡы исеменән Башҡорт АССР-ы хеҙмәтсәндәрен РСФСР Верховный Советы Президиумы һәм Россия Федерация-

[1] «Правда» № 83, 23 март 1944 йыл.

һының Министрҙәр Совете ҡотланы. СССР Верховный Совете Президиумының Указы менән Башҡорт АССР-ы икенсе тапҡыр Ленин ордене менән наградланды (беренсе орден менән ул 1935 йылда наградланғайны). 1957 йылдың 15 июнендә Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының башҡалаһы Өфөлә Башҡорт Государство опера һәм балет театрында СССР һәм РСФСР хөкүмәттәре делегацияларының ҡатнашлығында Башҡорт АССР-ы Верховный Советенең юбилей сессияһы булды. Юбилей сессияһы Советтәр Союзы Коммунистәр партияһы Үҙәк Комитетенә һәм Совет хөкүмәтенә, шулай уҡ рус халҡына һәм РСФСР хөкүмәтенә хат ебәрҙе. Был хаттарҙа башҡорт халҡының рус халҡы менән дуҫлыҡты тағы ла күберәк нығытырға ысын күңелдән әҙер тороуы белдерелә.

Башҡорт халҡы менән СССР-ҙың бөтә халҡтары араһында ныҡлы дуҫлыҡ урынлашты. «Бүлгелә лә хакимлек ит» тигән принцип буйынса эш иткән царизм тарафынан башҡорттар менән татарҙар араһында тыуҙырылған дошманлыҡ мәңгегә бөтөрөлдө. Территориаль алыҫлыҡ һәм телдәрҙең төрлө булыуы башҡорт халҡына украин халҡы менән ныҡлы дуҫлыҡ урынлаштырыуға ҡамасауламаны. 1957 йылдың ахырында Украина ССР-ының 40 йыллығын байрам итеүҙә ҡатнашыу өсөн Башҡортостан делегацияһы Киевкә барып ҡайтты. Украина Коммунистәр партияһы Үҙәк Комитетенә һәм Украина ССР-ы Верховный Советенә КПСС-тың Башҡортостан Өлкә комитетенең һәм Башҡорт АССР-ы Верховный Советенең 1957 йыл 25 декабрҙәге ҡотлау хатында былай тиелә: «Беҙ украин халҡы менән һәм беҙҙең Бөйөк Тыуған илебеҙҙең башҡа халҡтары менән дуҫлыҡты юғары баһалайбыҙ, уны арымай-талмай нығытасаҡбыҙ. Беҙҙең көсөбөҙҙөң сығанағы, беҙҙең артабанғы уңыштарыбыҙҙың залогы һәм Совет государствоһының еңелмәҫлеге — ошо дуҫлыҡта»[1].

Советтәр Союзы халҡтарының нығый барған дуҫлыҡтары уларҙың маҡсаттарының, идеалдарының уртаҡлығына нигеҙләнгән. Коммунистәр партияһы етәкселек иткән СССР-ҙың бөтә милләт хеҙмәтсәндәре беҙҙең илебеҙҙә коммунизм төҙөп еткереү өсөн, совет Тыуған иленең экономикаһын һәм культураһын артабан сәскә

[1] «Советская Башкирия» № 301, 25 декабрь 1957 йыл.



аттырыу өсөн көрәшәләр. Был көрәштә хәҙер улар шундай бейеклектәргә өлгәштеләр, шундай ҡайтанан ҡороуҙар үткәрҙеләр, былар беҙҙең илебеҙ халҡтарының тарихи үҫешендә яңы осор — коммунистик общество киң күләмдә төҙөү осорон астылар. Коммунизмдең материаль-техник базаһын булдырыу был осорҙоң төп бурысы булып тора. 1959—1965 йылдарға СССР-ҙы үҫтереүҙең Коммунистәр партияһы һәм Совет хөкүмәте тарафынан эшләнгән планы был бурыстың байтаҡ өлөшөн үтәүгә иҫәпләнгән.

СССР халҡ хужалығын үҫтереүҙең 1959—1965 йылдарға контроль һандарында бөтә милли республикаларҙың экономикаһын һәм культураһын артабан күтәреү интерестәре иҫәпкә алына. Партия тарафынан билдәләнгән был планды үтәү СССР-ҙағы бөтә халҡтарҙың, шул иҫәптән Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең дә, серьез көс һалыуҙарын талап итәсәк. Башҡортостан республикаһының хеҙмәтсәндәре алдында республиканың промышленносен һәм ауыл хужалығын яңынан ҡеүәтле күтәреүҙе тәьмин итеү өсөн көстәрҙе мобилизациялау, шулай уҡ башҡорттарҙың формаһы яғынан милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик булған милли культураһын артабан үҫтереү бурыстары тора.

Бөйөк рус халҡының һәм СССР-ҙағы башҡа халҡтарҙың туҡтауһыҙ үҫә барған ярҙамы һәм уларҙың нығый барған дуҫлыҡтары иркле башҡорт халҡының киләсәктәге уңыштарының мөһим шарты ул.

**СССР ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ**
**БАШҠОРТОСТАН ФИЛИАЛЫ**
**ТАРИХ, ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ИНСТИТУТЫ**

# БАШҠОРТ СОВЕТ ӘҘӘБИӘТЕ

**Тәнкит-библиографик күҙәтеүҙәр**

*Башҡортостан китап издательствоһы*
*Өфө — 1955*



Б ла китап ын „Баш кортостан .а р волюцияға тик-
ләм ә әби баш анышта э" шулай ук „Г ажланилар һуғы-
шы һәм хужал кты ая ка бастырғыу ос ронда башко т
әҙәбиәте" тигә бүлек әге фи ология фәндәре канди-
даты Зәһит Йо опов (Шә к ) тарафы ан яҙылды.

Социали м. эн ен үе осс онлағы ба ҡорт әҙәбиәте"
тигә бүлек фи олог я ф ндәре кан даты Ғилемдар
Рам анов тара ы нан эшл нде.

„Бөйөк Вата һу ыш ы о оронда б шкорт әҙәбиә-
те" тигән бүлек Ғ йн н Әмири яҙҙы

„Һуғыштан уң ы йылдарҙа б ш орт әҙәбиәте"
тигән бүлек фил ло я фәндәре канди ты Әхнәф Ха-
ри ов тарафынан я лды.

Кит пты ғела т ләлауҙа филология әндәре канди-
даттары Кирәй М гән һәм Ә. Харисов иптәштәр ҡат-
на тылар.

## БАШҠОРТОСТАНДА РЕВОЛЮЦИЯҒА ТИКЛЕМ ӘҘӘБИ БАШЛАНЫШТАР

Революцияға тиклем Башҡортостан батша Россияһының артта ҡалған мөйөштәренән береһе ине. Рәсәйҙең байтаҡ халыҡтары кеүек үк, башҡорт халҡының да үҙ яҙмаһы, милли әҙәби теле һәм мәктәптәре булманы. Ә йәшәп килгән ҡайһы бер мәктәптәр — дини-схоластик мәктәп һәм мәҙрәсәләр ине, һәм уларҙа балаларҙы ғәрәп, фарсы телдәрендә уҡыталар ине. XX быуат башында тормош эсөн кәрәкле фәндәр уҡытыла торған айырым мәктәп һәм мәҙрәсәләр асыла башлаһалар ҙа, уҡытыу эше барыбер туған телдә алып барылманы.

Ләкин социаль һәм колониаль иҙеү шарттарында ла халыҡтың культураға, аң-белемгә ынтылышы, ижади активлеге һүнмәне. Был шарттарҙа халыҡтың рухани байлығы, аң-белемгә һәм яҡты тормошҡа ынтылышы, уның моң-зары ауыҙ-тел ижадында асыҡ сағылды.

Башҡорт халҡының поэтик ижады — уның быуаттар буйына һуҙылған көрәшенең художестволы тарихе ул.

Башҡорт халыҡ ижадының алтын фондына ингән героик поэмаларҙа, ҡобайырҙарҙа халыҡтың Тыуған илгә булған тәрән мөхәббәте, ил дошмандарына ҡаршы героик көрәше сағыла. Халыҡ эпосының геройҙары — улар ғәҙеллек өсөн, халыҡ бәхете өсөн көрәшеүсе батырҙар.

Башҡорт халыҡ ижады йырҙарға айырыуса бай. Тыуған ил тураһындағы, сит ил илбаҫарҙарына ҡаршы алып барылған төрлө һуғыштарҙы, героик походтарҙы һәм халыҡтың ауыр тормошон, яҡты өмөтөн сағылдырған йырҙарҙы бик күп күрһәтергә мөмкин.

Башҡорт халыҡ ижадында шулай уҡ легендалар һәм әкиәттәр ҙә бик ҙур урын алып торалар. Уларҙа ыңғай герой булып халыҡҡа сит булған яуыз көстәргә ҡаршы көрәшеүсе батырҙар, халыҡ аҡылын көүҙәләндереүсе тапҡыр һүҙле кешеләр һүрәтләнделәр.

Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижадының айырым өлгөләрен йыйнау һәм баҫып сығарыу эше үткән быуаттың беренсе яртыһында уҡ башланһа ла, башҡорт фольклорын ғилми өйрәнеү һәм баҫып сығарыу эше ысын мәғәнәһендә тик совет шарттарында ғына мөмкин булды.

Ауыҙ-тел ижадының оҫталары булған сәсәндәр менән бер рәттән XVIII быуаттың урталарында Башҡортостанда айырым мәғрифәтселәр күренгеләй башлай. Улар үҙҙәренең әҙәби теле булмағанлыҡтан, шул замандың китап теле итеп йөрөтөлгән яһалма «төрки» телендә яҙалар.

Пугачёв етәкселегендәге крәҫтиән һуғышы осоронда талантлы шағир-импровизатор булып башҡорт халыҡ геройы Салауат Юлаев күтәрелеп сыға.

Башҡортостанды өйрәнеүселәрҙән Р. Г. Игнатьев үҙенең «Салауат Юлаев — Пугачёв бригадиры, йырсы һәм импровизатор» (1873) тигән хеҙмәтендә Салауат Юлаев образы халыҡ хәтерендә полководец, массаларҙың башлығы булып ҡына түгел, ә оҫта шағир булып та һаҡланған, тип яҙа. Рус яҙыусыһы Ф. Нефедов, Салауат — ул бары тик тупаҫ физик көс кешеһе генә түгел, ә шағир ҙа ине, тип күрһәтә. Игнатьев 1865 йылда, ә Нефедов 1880 йылда Салауат шиғырҙарын тәүбашлап, рус теленә юлын-юлға тәржемә итеп баҫып сығарҙылар.

XVIII быуатта социаль һәм колониаль иҙеүҙең рәхимһеҙ шарттарында башҡорт һәм рус хеҙмәтсәндәренең көрәш бурыстары һәм интерестәре бергә ҡушыла. Салауаттың тарихи хеҙмәте Башҡортостан һәм Россия территорияһында йәшәгән төрлө халыҡ хеҙмәтсәндәре-

неҙ уртаҡ интерестәрен аңлай һәм тоя белеү менән билдәләнгән. Был сифат уның үҙ халҡына етәкселек итеүендә лә, шулай уҡ уның поэзияһында ла сағыла. Салауат ижадының социаль юнәлеше асыҡ: ул азатлыҡ тураһында йырлай, уның ижады феодаль һәм колониаль иҙеүгә ҡаршы көрәш рухы менән һуғарылған йырҙарҙан тора.

«Туйҙа, майҙанда көрәшеп, кеше йығыу менән генә кеше бәһлеүән булмай,— ти Салауат үҙенең бер шиғырында,— илен эйәртеп, ил ирке өсөн дошманын еңеп, ил күрке булыу — бына шул була бәһлеүәнлек». Бына тап ошо фекер Салауат поэзияһын билдәләүсе лейтмотив булып тора.

Салауат Юлаевтың ҙур булмаған поэтик мираҫы буйынса, шағирҙең үҙ заман ысынбарлығының мөһим ваҡиғаларын крәҫтиәндәр һуғышы бурыстары күҙлегенән сығып яҡтыртырға ынтылғаны асыҡ күренә. Салауат шиғырҙарында ыңғай герой булып, батырлыҡ, ҡыйыулыҡ менән дан алған егет-воин образы тора:

Рухым күтәрелде минең дә,
Эйәрләнем мин дә атымды.
Дошман сафын тар-мар итергә
Изге юлға уҡтай атылдым.

Салауаттың ҡайһы бер шиғырҙары туранан-тура башҡорт һуғышсыларына ҡаратылып, уларҙы ҡыйыу һуғышырға, дошмандан ҡурҡмаҫҡа өндәү булып яңғырайҙар:

Бейектә оса ҡоҙғон ҡош,
Унан бейек осор ыласын бар.
Ыласындан да бейек оса торған
Ҡош батшаһы — ҡыйғыр бөркөт бар.

Шул бөркөттәй, егет, батыр бул,
Тайғанында таян дуҫтарға.
Яуҙа арыҫландай ажғырып,
Йән аямай ташлан дошманға.

Салауаттың шиғырҙарында һүҙ күберәк Урал тураһында бара, һәм Урал образы, башҡорт халҡ ауыҙ-тел ижадындағы кеүек, тыуған илдең дөйөмләштерелгән образы рәүешендә һынландырыла:



Минең туған ҡырҙарым,
Балдай тәмле һыуҙарым,
Яландарым, урманым,
Күккә ашҡан Уралым,—
Минең изге төйәгем,
Һеҙҙе һөйә йөрәгем.
Күгәреп күккә үрелгән,
Ҡарлы башын Уралдың,
Күҙҙең яуын алырҙай
Матурлығын ҡырҙарҙың
Мәңге маҡтар инем мин,
Мәңге данлар инем мин.

(«Тыуған илем».)

Ләкин Салауат тәбиғәт гүзәллегендә, барыһынан элек, кеше тормошон, кешенең үҙен күрә белә. Халҡ алдында үҙен бурыслы итеп һанау шағирға тәбиғәтте үҙ алдына ғына гүзәл булғаны өсөн йырлау менән сикләнергә юл ҡуймай. Тәбиғәтте һөйөү тыуған илде һөйөүҙән айырылмай, һәм был оло һөйөү азатлыҡ идеяһына барып тоташа:

Һауаларға уҡ сөйөрғоттом,
Ҡарлуғасҡа тейҙе уҡҡынам.
Аҡҡынам янына ҡолап төшкәс,
Мескен ҡошто йәлләп юҡһынам.
Һауаға атҡан уҡҡайым
Тау, урмандар аша үҙһасы,
Ҡарлуғасҡай ҡошто үлтергәнсе,
Бер дошмандың йәнен өҙһәсе.

(«Уҡ».)

Тәбиғәтте тасуирләүҙә күп төрлө буяуҙар таба белгән кеүек үк, Салауат үҙен «Зөләйхә» тигән мөхәббәт шиғырында ғашиҡ кеше тойғоларын оҫта сағылдырыусы шағир итеп күрһәтә:

Зөләйхә, һин ергә ингән хур ҡыҙы,
Күҙҙәрендә balҡый Зөһрә йондоҙо.
Күҙҙәрең гүйә төндәге күк йөҙө,
Яҡтыра шул күҙҙәрендә ай үҙе.

Салауат шиғырҙарында һүрәтләү саралары<br>нан күренеүенсә, башҡорт халҡ ижадының ҙур йоғонтоһо бар. Уның поэзияһында ҡобайырҙарҙың эпик хикәйәләүенә хас алымдарҙы, ундағы кеүек сағыштырыуҙарҙы, эпитеттәрҙе йыш осратырға мөмкин.

Салауаттың поэтик мираҫында көнсығыш классик әҙәбиәтенең йоғонтоһо һиҙелгән айырым шиғырҙар ҙа

бар. Мәҫәлән, «Зөләйхә» шиғыры үҙенең образдар системаһы, тасуирләү саралары менән көнсығыш классик поэзияһындағы мөхәббәтте идеаллаштырылған «үтә күпертелгән буяулы» шиғырҙарға оҡшаш. Быны: «Зөләйхә, һин ергә ингән хур ҡыҙы», «Һындарың гүйә фирештә кәүҙәһе» кеүек юлдар күрһәтеп тора.

«Зөләйхә» шиғыры шулай итеп, Салауаттың үҙ заманындағы көнсығыш яҙма әҙәбиәте менән аҙмы-күпме таныш булыуы тураһында һөйләй.

Салауат Юлаевтың мираҫы ҙур түгел: беҙгә уның ни бары туғыҙ шиғыры ғына килеп еткән. Ләкин уның поэзияһы халҡсан булыуы менән, азатлыҡ идеялары үткәрелгән булыуы менән ҡиммәт.

Салауат поэзияһының традициялары XIX быуатта баҫма әҙәбиәттә үҙенең дауам итеүселәрен таба алманы. Крәҫтиән һуғышы баҫтырылғандан һуң батша хөкүмәте Башҡортостанда феодаль-кантон режимен урынлаштырҙы. Был режимдең маҡсаты хәрби сословие хәленә күсерелгән башҡорт халҡын царизмға бирелгәнлек рухында тәрбиәләүҙән тора ине. 1878 йылда батша хөкүмәте Өфөлә «Мосолмандарҙың үҙәк диниә идараһын» ойошторҙо. Ошо моменттән алып, ислам батша хөкүмәтенең терәге булып әүерелә.

«Үҙәк диниә идараһы» башҡорт халҡының идеологик һәм рухи тормошон ҡаты күҙәтеү аҫтына алды. Батша чиновниктәре, мөфти һәм уның ярҙамсылары — ҡазыйҙар, муллалар шымсылыҡ хеҙмәтен үтәп килделәр, азатлыҡ рухын һиҙҙергән кескәй генә күренештәрҙе лә шәриғәт хөкөмө аҫтына алдылар һәм халҡ интересен күҙәтеүселәрҙе, ирк өсөн көрәшкә ынтылыусыларҙы туранан-тура полиция ҡулына тотоп бирҙеләр. Царизмға хеҙмәт күрһәтеп, халҡтың аңын томалау маҡсатында, дини-мистик китаптар тараттылар.

Салауат мираҫы законға ҡаршы күренеш тип иғлан ителде, уның поэтик традицияһын дауам итеүселәр ҡаты эҙәрләнделәр. Ләкин Салауат традицияларын һаҡлаусы һәм үҫтереүсе сәсәндәр, йырсылар, ҡурайсылар уның шиғырҙарын, йырҙарын телдән-телгә һөйләп йөрөттөләр, уның тураһында эҫәрҙәр сығарҙылар.

Башҡортостанда капиталистик мөнәсәбәттәрҙең тыуа башлауы менән XIX быуат урталарында һаи ягынан бик аҙ булған башҡорт уҡымышлылары араһында



рус уҡыу йорттарында тәрбиәләнгән М. Бикчурин, М. Ҡыуатов, М. Өмөтбаев кеүек прогрессив фекерле культура эшмәкәрҙәре күренә башланылар.

Мирсалих Бикчурин (1798—1872) Оренбургта офицерҙәр әҙерләй торған Неплюев кадет корпусында көнсығыш телдәре уҡытыусыһы булып эшләгән. Уида ул үҙенең туған теле булған башҡорт теле буйынса практик дәрестәр ҙә бирә торған булған. Бикчурин Крыловтың айырым басняларен («Ишәк менән ҡарлуғас», «Бүре менән һарыҡ бәрәсе», «Эт дуҫлығы» һ. б.) тәржемә итеп, 1859 йылда «төрки» телендә баҫтырып сығарған. Башҡорт йәштәрен рус теленә өйрәтеү өсөн яҙылған «Азбувник» тигән тәүге китаптың да авторы — Мирсалих Бикчурин. Шулай уҡ ул башҡорт йырҙарын, әкиәттәрен һәм легендаларын йыйнаған һәм уларҙың бер өлөшөн баҫтырып сығарған.

Верхне-Урал өйәҙе Сәрмән ауылындағы рус-башҡорт мәктәбе уҡытыусыһы Мөхәмматғәлим Ҡыуатовтың эшмәкәрлеге лә үҙ заманы өсөн бик мөһим. Ул егерме биш йыл буйы башҡорт балаларын рус теленә өйрәткән. 1895 йылда башҡорт телендә беренсе тапҡыр башҡорт мәҡәлдәрен баҫтырып сығарған.

Үҙ заманы өсөн Мөхәмматсәлим Өмөтбаевтың мәғрифәтселек эшмәкәрлеге лә әһәмиәтле булған. Ул, ҡырҡ биш йыл буйы Башҡортостандың үҙәге — Өфөлә йәшәп, үҙ халҡының тормошон, көнкүрешен өйрәнгән. Был хаҡта ул айырым хеҙмәттәр ҡалдырған.

Мөхәмматсәлим Өмөтбаев (1841—1907) Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе (хәҙерге Ҡырмыҫҡалы районы) Ибраһим ауылында тыуған. Уның атаһы Ишмөхәмәт Өмөтбаев 9-сы башҡорт кантоны командаһында үҙенең хәрби хеҙмәтен рядовой казак булып башлап, Севастополь оборонаһы һуғыштарында ҡатнашҡан. Унда батырлыҡ күрһәткәне өсөн беренсе дәрәжә Станислав ордене менән наградланған. Ишмөхәмәт үҙенең улын офицер итеү уйы менән Оренбургтағы Неплюев кадет корпусына уҡытырға биргән.

Мөхәмматсәлим Өмөтбаев мәҙрәсәләрҙә рус теле уҡыта, төрлө учреждениеларҙа тәржемәсе булып эшләй. Ул үҙ ғүмерендә рус культураһын пропагандалаған күп кенә мәҡәләләр яҙған. Был хеҙмәттәрендә ул

башҡорт халҡын Мәскәү менән, уның күренекле тарихи ҡомартҡылары — рус зодчествоһының матур өлгөһө булған Успенский собор, Девичий монастырь, Оружейный палаталары менән таныштырған. Өмөтбаев үҙенең бер нисә очерегендә Петроград тарихенә һәм культураһына ҡағылышы булған күренештәрҙе яҡтыртыуға бағышлаған. Ҡышҡы һарайҙы, башҡаланың музейҙәрен, уның гүзәл тарихи һәйкәлдәрен тәрән һоҡланыу менән тасуир иткән. Был эштәр уның «Ядкәр» (1875) тигән китабына индерелгәндәр.

Өмөтбаев башҡорт халҡы араһында рус культураһын популярләштереү менән бергә, рус халҡын башҡорт культураһы менән таныштырыу өлкәһендә лә күп кенә хеҙмәт күрһәткән. Күп йылдар буйы ул рус География обществоһының даими корреспонденте булып эшләгән һәм унда Башҡортостан тураһындағы хәбәрҙәрен, мәҡәләләрен ебәрә торған булған. Ошо уҡ общество өсөн уның тарафынан башҡорт этнографияһы буйынса ҙур хеҙмәте әҙерләнгән. Ләкин был хеҙмәт заманында баҫылмай ҡалған. Ул хәҙер ҡулъяҙма хәлендә Ленинград Этнография институтында һаҡлана.

М. Өмөтбаевтың иң әһәмиәтле хеҙмәттәренең береһе итеп Пушкиндең «Баҡсаһарай» поэмаһын тәүбашлап тәржемә итеүен күрһәтергә кәрәк. Бөйөк рус шағиренең был әҫәре Өмөтбаев тәржемәһендә 1901 йылда айырым китап булып баҫылып сыҡҡан. Дөрөҫ, тәржемә оригиналды бөтә поэтик үҙенсәлектәре менән биреүҙе дәғүә итмәй. Өмөтбаев уны ҡыҫҡартып һәм иркле рәүештә тәржемә иткән. Шуға ҡарамаҫтан, башҡорт һәм татар уҡыусыларын тәүбашлап бөйөк Пушкин әҫәре менән таныштырыусы булыуы менән Өмөтбаевтың исеме культура өлкәһендә үҙенең урынын алып тора.

Өмөтбаевтың башҡорт һәм татар халҡы араһында мәғариф эше ҡуйылышын яҡшыртыу өлкәһендәге хеҙмәтен дә әйтеп үтергә кәрәк. Өмөтбаев мәҙрәсә һәм мәктәп программаларына общественный һәм практик фәндәр индереүҙе, рус телен үҙаллы предмет итеп уҡытыуҙы, әсә телендә уҡыу китаптары булдырыуҙы талап иткән һәм шуларҙы булдырыу өсөн көрәшкән. Уның инициативаһы менән тәржемәселәр комиссияһы төҙөлгән һәм уның етәкселегендә рус уҡыу китаптары, шулар араһында Л. Н. Толстойҙың һәм К. Д. Ушинскийҙең педагогик китаптары ла тәржемә ителгән.



М. Өмөтбаевтың ғилми хеҙмәттәренән «Тарихи яҙмалар» тигән әҫәренең әһәмиәте бар. Был хеҙмәт шул замандағы башҡа китаптар кеүек ислам тарихен түгел, ә башҡорт халҡы тарихенә бәйле күренештәрҙе һөйләүе менән, тарихи факттарҙы дини легендалар нигеҙендә түгел, бәлки документаль сығанаҡтарға таянып яҡтыртыуы менән әһәмиәтле. Өмөтбаев файҙаланған сығанаҡтар араһында башҡорт шәжәрәләре, башҡорт халҡ риуаяттары (предания) һәм башҡа фольклор ҡомартҡылары бар.

М. Өмөтбаев үҙ ғүмерендә шиғырҙар ҙа яҙған. Ләкин улар бөтәһе лә баҫылмаған. Бары тик бер өлөшө генә «Ядкәр» тигән китабына ингән. Бер өлөшө Ленинград Этнография институты архивендә һәм СССР Фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты фондында һаҡлана.

М. Өмөтбаев шиғырҙарында уның донъяға ҡарашының ҡаршылыҡлы булыуы асыҡ сағыла. Ауыр социаль һәм милли иҙелеү Өмөтбаевты үҙ халҡы яҙмышы тураһында уйланырға, был хәлдән сығыу юлдарын эҙләргә мәжбүр иткән. Ләкин быны ул таба алмаған. Уның шиғырҙарында идеалистик өмөтләнеү, дини буйһоноусанлыҡ, башҡорт халҡының үткән тормошон идеаллаштырыу мотивтәре бар. «Илаған бала», «Минең нәсихәтем һәм өгөтөм», «Нәсихәт» кеүек шиғырҙарында М. Өмөтбаев хатта революцион сығыштарға туранан-тура ҡаршы сыға, революционерҙәрҙе ғәйепләй, үҙ ватандаштарын «изгелек» күрһәтеүселәр һаулығына аллаға доға ҡылырға, уларҙан өлгө алырға саҡыра һәм «изгелек» күрһәтеүселәрҙе ярлыларға ярҙам итергә өндәй.

Ләкин Өмөтбаевтың тормошто шаҡтай дөрөҫ сағылдырған әҫәрҙәре лә бар. «Үткән ғүмер, ҡалған хәтер», «Ишек төбөндә» һәм башҡа ҡайһы бер шиғырҙарында Башҡортостанда капиталистик үҫештең колониаль характерҙа булыуын күрә, башҡорт ерҙәрен талаусы помещиктәр, батша чиновниктәре, купецтәр килтергән бөлгөнлөктәрҙе күрһәтергә тырыша:

Аяҡлы мал тамам бөтә яҙҙы,
Ағастар аҡты, Әстрханға уҙҙы.
Уның артынан осто бал ҡорттары,
Юҡ инде тау кеби ағас тауҙары.

(«Шикәйәт» шиғыры, 1897.)

М. Өмөтбаев Башҡортостандағы капиталистик мөнәсәбәттәрҙең кире яҡтарын дөрөҫ күрһә лә, патриархаль тормошҡа ҡарағанда капитализмдең прогрессив күренеш икәнлеген аңламай.

Был ҡаршылыҡтың сәбәбе асыҡ: Өмөтбаев үҙенең мәғрифәтселек эшен халҡтың азатлыҡ хәрәкәте менән бәйләй алманы. Уның теләге тормошто революцион юл менән үҙгәртеү түгел, бары тик йәшәп килеүсе ҡоролошҡа ҡайһы бер реформа индерергә ынтылыу ине. Шул юл менән башҡорт халҡының социаль талаптарын ҡәнәғәтләндереп булыр тип уйлап, ул батша хөкүмәтенә бик күп прошениелар яҙған, башҡорт халҡының культура-ағартыу мәсьәләләре буйынса ихтыяждарын үтәүҙе һорап, царизм органдарына күп тапҡыр мөрәжәғәт иткән.

Уның иҫке мәҙрәсә һәм мәктәптәрҙәге уҡытыуҙы реформалаштырыуҙы талап иткән сығыштары, башҡорттарҙы рус культураһы менән нығыраҡ аралаштырыуға ынтылышы, Башҡортостанда граждандар тарихенең ҡайһы бер моменттәрен яҡтыртырға тырышыуы һәм, аҙаҡ килеп, үҙ халҡын Пушкин әҫәрҙәре менән таныштырыу юлындағы хеҙмәте — башҡорт халҡының культура хеҙмәтендә әһәмиәтле күренештәр булып торалар.

М. Бикчурин, М. Ҡыуатов һәм М. Өмөтбаев башҡорт интеллигенцияһының XIX быуаттың икенсе яртыһындағы типик вәкилдәре булдылар. Уларҙың эшмәкәрлегендә һәм хеҙмәттәрендә ул замандағы башҡорт общество фекеренең үҙенсәлекле үҫеше сағылды. Капитализм үҫеше, Россияның башҡа халҡтары менән сағыштырып ҡарағанда рус халҡында промышленность, ауыл хужалығы техникаһы тиҙерәк һәм прогрессиверәк үҫеүе башҡорт интеллигенцияһынан рус культураһына, рус теленә эйә булыуҙы талап итте. Шуға күрә лә милли интеллигенция прогрестән артта ҡалмау өсөн рус культураһы менән аралаштыра, уның



ҡаҙаныштарын халҡ араһында таратырға тырышты, рус культураһы өлгөһөндә башҡорт милли культураһын, әҙәби телен булдырырға, башҡорт халҡының тарихен тыуҙырырға ынтылды. Был яҡтан ҡарағанда уларҙың эшмәкәрлеге, һис һүҙһеҙ, прогрессив күренеш булып тора.

Капитализмдең колониаль иҙеүенең көслө булыуы арҡаһында бындай берәмек мәғрифәтселәр, культура эшмәкәрҙәре политик яҡтан өлгөрөп етә алманылар, эпоханың революцион-демократик идеялары юғарылығына күтәрелә алманылар. Улар аңында феодаль идеология ҡалдыҡтары көслө сағылды һәм яңы инә барған капитализм күренештәрен, уның колониаль иҙеүгә ҡоролған ҡара яғын, иҫке тормош позицияһынан тороп тәнҡит иттеләр.

∴

Әҙәби эшмәкәрлеген 1902 йылда башлаған М. Ғафури Салауат Юлаев поэзияһының азатлыҡ идеяларын һәм ауыҙ-тел ижадының яҡшы традицияларын дауам иттереүсе булды.

Мәжит Нурғәни улы Ғафури 1880 йылда Стәрлетамаҡ өйәҙе (хәҙерге Ғафури районы) Елем-Ҡаран ауылында тыуған. Мәжит йәшләй етем ҡала. Тәүге белемде үҙ ауыл мәҙрәсәһендә алып, 1896—1908 йылдар эсендә ауыр материаль шарттарҙа Башҡортостан, Татарстандың төрлө мәктәптәрендә уҡый. 1905 йылғы беренсе рус революцияһын Ҡазанда ҡаршылап, студент забастовкаларында, демонстрацияларҙа, төрлө митингеләрҙә ҡатнаша. Бында Ғафури татар һәм башҡорт социал-демократтары етәксеһе революционер Хөсәин Ямашев менән яҡынлаша. Ошо уҡ йылдарҙа татар халҡ шағире Ғ. Туҡай менән, Ғ. Камал, Ғ. Ҡоләхметов кеүек яҙыусылар менән дуҫлаша.

1906 йылда Ғафури Өфөгә ҡайта һәм ғүмеренең һуңғы көндәренәсә шунда йәшәй.

Ғафури үҙенең ижад юлын мәғрифәтсе яҙыусы булып, беҙҙең илдә азатлыҡ көрәшенең өсөнсө — пролетар этабы тыуыу һәм күтәрелеү дәүерендә башланы. Йәш шағир 1904 йылда Оренбургта баҫылған «Себер тимер юлы вә әхүәле милләт» тигән беренсе шиғыр йыйынтығында уҡ революцион ваҡиғаларҙың үҫеүе

йоғонтоһонда азатлыҡ темаһы күтәрә. Дөрөҫ, дини-схоластик мәктәптәрҙә тәрбиәләнгән Ғафури ул саҡта синфи көрәште аңлауҙан, милли иҙеүҙең синфи асылына төшөнөүҙән алыҫ тора ине әле. Шуға күрә ул үҙ шиғырҙарында синыфтарҙы айырып ҡарамай, ә ғөмүмән «милләт», «мосолмандар» тураһында ғына һөйләй.

Шулай ҙа Ғафуриҙең мәғрифәтселек идеялары башҡорт һәм татар буржуазияһының һәм руханиҙәренең йәдитселек идеяларынан тамырынан айырыла ине.

XX быуат башында, йәғни Ғафури әҙәбиәткә килгән йылдарҙа, пантюркист йәдитселәр батша Россияһының йәберләнгән халҡтары араһында милли азатлыҡ хәрәкәтенең көсәйеүен үҙ синфи интерестәре файҙаһына ҡулайлаштырыу маҡсаты менән «милләтте азат итеү», «милләтте ағартыу» тураһында шау-шыу күтәрҙеләр. Башҡортостанда, Татарстанда, Урта Азияла, Ҡавказ артында йәдитсе мәктәптәр, ваҡытлы матбуғат, мәғрифәт учреждениеләре барлыҡҡа килә башланылар. Ләкин йәдитселек эпохаһының прогрессив күренеше түгел ине. Йәдитселәр милләтте азат итеү байрағы аҫтында үҙ милли буржуазияһының хакимлеген нығытырға, милли буржуаз культураны үҫтереүгә тырыштылар. Пантюркистәрҙең, йәдитселәрҙең төп маҡсаты: Россияны бүлгеләү, төрөк телле халҡтарҙы рус халҡынан айырыу, Англия империализме протектораты аҫтында үҙ милли буржуаз государстволарын төҙөүҙән тора ине.

Уларға ҡапма-ҡаршы рәүештә Ғафури «милләтте азат итеү» идеяһында ошо милләттең хеҙмәтсәндәрен күҙ алдында тота:

Кешеләрҙең бәғзеһе туҡ, бәғзеһе аҫ,
Аҫтарға мәрхәмәтле күҙеңде ас!
Донъя тулған мазлумдарға күҙе төшөп,
Ғәбделмәжит шиғыр яҙа, аптырағас.
(«Көндәребеҙ», 1904.)

Ғафури мәғрифәтселеге демократик идеяларға нигеҙләнгән. Шағир үҙ халҡын алдынғы рус культураһы менән аралаштырырға тырышты. Ул үҙ халҡын милли уяныуға, белемгә һәм азатлыҡҡа саҡырҙы. Был йәһәттән уның «Себер тимер юлы» шиғыры (1902) ҙур әһәмиәткә эйә. Шағир унда башҡорт һәм татар халҡтарының артталығын тәнҡит итеп, уларҙы рус фәненән, техникаһынан өйрәнергә, рус культураһының бай ҡаҙаныштарын ижади үҙләштереү аша үҙ тормоштарын өлгөлө итеп ҡорорға саҡырҙы. Шағир халҡтарҙың берҙәм тыуған иле Россияға дан йырланы:



Беҙҙең был Россия тырышлыҡ итте,
Һиммәте нигеҙендә алға китте,
...Россияны хәл еткәнсе данлау кәрәк,
Булғаны өсөн баһадир — бигерәк һирәк.
..Шул ваҡыт асырбыҙ телебеҙҙе,
Төрлө тараф һелкетербеҙ гөлөбөҙҙө,
Берәм-берәм айырыуса шиғыр менән
Беҙ данларбыҙ Россия — илебеҙҙе.

Мәғрифәтсе Ғафури йәшәп килгән мәктәп һәм мәҙрәсәләрҙәге уҡытыу һәм ундағы тәртип менән килешә алманы. Шағир ул мәктәптәрҙе ҡараңғылыҡ, наҙанлыҡ, культураһыҙлыҡ таратыусылар тип атаны. 1902 йылда Троицк мәҙрәсәһендә уҡыған сағында уҡ, ул ишан шәкерттәренән көлөп, мәҙрәсәләге ҡырағай тәртипте, схоластиканы ҡаты тәнҡитләп, сатирик шиғыр яҙҙы. Бының өсөн Ғафуриҙе мәҙрәсәнән ҡыуып сығаралар.

Әлбиттә, Ғафури иленең артта ҡалыу, үҙ халҡының культураһыҙлығы һәм хоҡуҡһыҙлығының сәбәптәрен дөрөҫ аңлап етә алмай. Ул, халҡтың ауыр хәле уның наҙанлығынан килә тип һәм ағартыу-аңлатыу юлы менән генә был социаль тигеҙһеҙлекте бөтөрөргә мөмкин, тип иҫәпләй:

Кил, милләтем, фәҡирлектән сығайыҡ,
Һөнәр-ғилемгә тырнаҡтарҙы батырайыҡ:
Һәр зарарҙың башы фәҡирлектә,
Ул мәлғүн фәҡирлекте нә ҡылайыҡ?

Ғафури милли иҙеүҙең синфи асылын аңлап етә алмаһа ла, империализм һәм царизмдең азатлыҡ дошмандары икәнен, бәләкәй һәм көсһөҙ халҡтарҙың иҙеүселәре булыуын әкренләп төшөнә башлай. Ул үҙенең әҫәрҙәрендә царизм шарттарындағы хеҙмәтсән халҡтың ауыр хәлен сағылдыра. Ғафури үҙенең 1902 йылда яҙған «Фәҡирлек менән үткән тереклек» хикәйәһендә мәғрифәткә, аң-белемгә өндәүсе генә булып ҡалмай, ә тормошто үҙ ҡараштары менән бергә сағылдырырға, уны конкрет кешеләр образы аша һүрәтләргә ынтыла һәм ысынлап та, «Фәҡирлек менән үткән тереклек» хи-

кәйәһе темаһы һәм һүрәтләү алымдары менән үҙ заманы өсөн яңылыҡ булып тора: яҙыусы башҡорт-татар яҙыусылары араһынан беренсе булып, иҙелгән синыф кешеләренең тормошон күрһәтә.

Хикәйәлә көнө-төнө кулакка эшләүсе ауыл батрагы Ниғмәтулла һәм уның ҡатыны Сәрбиҙең михнәтле тормошо тасуир ителә. Ни тиклем генә көс түгеп эшләмәһендәр, улар иҫ киткес мохтажлыҡта, хәйерсе хәлендә йәшәйҙәр. Әҫәр Ниғмәтулланың ҡышҡы буранда туңып үлеүе менән тамамлана. Әлбиттә, был әҫәрҙә ваҡиғаларҙы типикләштереү, тәрән дөйөмләштереү юҡ әле. Ғафури нимә күрһә, шуның береһен дә ҡалдырмай, түкмәй-сәсмәй һөйләргә тырыша. Ул үҙенең тәнҡитенән революцион һөҙөмтәләр яһай алмай әле. Үҙ геройҙарының йөрәк әрнеткес тормоштарын күҙәтеп, ул: «Был донъяла фәҡирлек һәм мохтажлыҡтар бөтөрмө? Бөтә ерҙә мохтажлыҡ, әрнеү, хәсрәт,-- ни эшләргә?» — тип үҙенә һорау бирә.

Яҙыусының был һорауына яуапты беренсе рус революцияһы алып килде.

1905 йылғы революция Ғафуригә бай политик мәктәп булды. Яҙыусы идея яғынан үҫте. Ул үҙенең күп һорауҙарына яуап тапты. Уның ижады натурализмдән, мәғрифәтселек мотивтәренән әкренләп ҡотолоп, революционлаша барҙы. Аҙаҡ килеп, ул революцион-демократик яҙыусы булып формалашты.

Ғафури ул йылдарҙа халҡты актив көрәшкә саҡырған революцион юнәлештәге шиғырҙарын яҙҙы. Был йәһәттән уның бигерәк тә «1907 йылдың яуабы» тигән шиғыры характерле. Был шиғырында Ғафури йәшәп килгән ҡоролошто хатта революцион көс менән емерергә саҡырыу кимәленә күтәрелә:

Донъяға кейҙерербеҙ башҡа күлдәк,
Ҡайғы-хәсрәт һуңы булыр уйнап-көлмәк!

Дөрөҫ, бындай революцион идеялар шағирҙең ижадында эҙмә-эҙлекле рәүештә үҫә бармайҙар, уның ижадында ҡаршылыҡлы фекерҙәр ҙә бик йыш осрай. Ул революцияның үҫеш юлдарын асыҡ күрә белмәне. «Беренсе дума асылды» кеүек либераллыҡ, килешеүсәнлек рухындағы шиғырҙар ҙа яҙҙы. Ләкин шулай ҙа Ғафуриҙең был йылдарҙағы ижады нигеҙҙә халҡ



массаларының самодержавиегә ҡаршы көрәшен сағылдырҙы. Шуға күрә лә 1906—1907 йылдарҙа баҫылған «Минең тормошом», «Милләт мөхәббәте» тигән шиғыр йыйынтыҡтары өсөн шағирҙең Ҡазан суд палатаһы тарафынан хөкөмгә тартылыуы осраҡлы хәл түгел.

Ғафури ҡара реакция йылдарында ла халҡ интерестәре менән йәшәне, хеҙмәтсән массаны иҙеүселәрҙе һәм революцияға хыянат итеүселәрҙе рәхимһеҙ фашланы.

Яҙыусының был йылдарҙа яҙылған күп шиғырҙары һәм хикәйәләре араһында «Ярлылар, йәки өйҙәш ҡатын» (1907) хикәйәһе айырыуса иғтибарға лайыҡлы.

Әҫәрҙә, башҡорт ауылдарына капитализмдең килеп инеүе арҡаһында, крәҫтиәндәрҙең, эш эҙләп ҡалаға килеп, сезонлы ҡала эшселәренә әүерелеүҙәре һәм уларҙың ауыр тормоштары хикәйә ителә. Хикәйәлә ике семьяның тормошо күрһәтелә. Ауылдан бөлөп, ярлыланып килгән Шәриф ҡалала эш таба алмай. Ул бында, бик күптәр кеүек, осраҡлы эш хаҡы менән генә йәшәй башлай. Мохтажлыҡ уны сезонлы ҡара эшсе яһай.

Шәриф тормоштоң иң түбән баҫҡысында торһа ла, күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй. Ул, эшһеҙҙәрҙең күп булыуы арҡаһында, ҡалала эш табыу ҡыйынлыгын яҡшы белһә лә, өмөтөн өҙмәй — һәр көн тырышып, үҙенә эш эҙләй һәм һирәк-һаяҡ уңышҡа ла ирешә: ҡаланың берәй байы уны йә утын ярырға, йә ҡар көрәргә яллай. Эш табылған көндәр семьяга ҙур шатлыҡ килтерә. Шәриф һатып алған ашамлыҡтарын һөйөнөс менән өйгә алып ҡайтҡан минуттарҙа, аслыҡтан интеккән семья сикһеҙ ҡыуана. Сиктән тыш ярлы булыуҙарына ҡарамаҫтан, улар хеҙмәт менән тапҡан кескәй генә «бәхет»тәрен башҡалар менән уртаҡлашалар: күршеләре Йәмиләне лә өҫтәл янына саҡыралар.

Шәриф образында Ғафури фәҡирлектең һәм иҙелеүҙең ниндәй ауыр шарттарында ла хеҙмәтсәндәрҙең ысын күңеллелек, эш һөйөүсәнлек, энергиялылыҡ һәм гуманизм кеүек гүзәл рухи сифаттарын һаҡлауын күрһәтә.

Хикәйәлә Шәрифтең ҡатыны Бәҙри һәм ире тарафынан рәхимһеҙ яҙмыш ҡосағына ташланған Йәмилә образдары аша яҙыусы буржуаз обществола башҡорт

һәм татар ҡатын-ҡыҙҙарының ирҙәргә ҡарағанда ла нығыраҡ иҙелеүҙәрен күҙәләндерә.

«Ярлылар, йәки өйҙәш ҡатын» хикәйәһе йөкмәткеһе менән генә түгел, формаһы менән дә әһәмиәтле. Бында яҙыусының халыҡ теле байлығын файҙалана белеүе асыҡ сағыла. Уның шиғырҙары менән сағыштырғанда, был әҫәрҙә ғәрәп, фарсы һүҙҙәре бик аҙ осрай. Ғафури тәбиғәттең йәнле картиналарын образлы күрһәтә, геройҙарҙың ҡылыҡтарын, портреттәрен дә матур ғына тасуирлай. Әлбиттә, яҙыусы әле геройҙарының телен индивидуаллаштереп етә алмай. Шуға күрә персонаждар телен бер-береһенән айырыу шаҡтай ауыр. Автор хикәйәләүе менән персонаждар теле араһында ла әллә ни айырма юҡ. Ләкин, ғөмүмән алғанда, был хикәйә Ғафури теленең үҫә барыуын күрһәтә.

«Ярлылар, йәки өйҙәш ҡатын» Ғафуриҙең популяр әҫәрҙәренең береһе. Үҙ заманында был әҫәр буржуаз ҡоролошҡа, иҙеүселәргә ҡаршы күрә алмау тойғоһо тәрбиәләүгә ярҙам итте.

Столыпин реакцияһы йылдарында Ғафури басня жанрына мөрәжәғәт итә. Ул 1907—1914 йылдар эсендә егерме бишләп басня яҙҙы. Шағир үҙенең басняләрендә капиталистәрҙең эшселәрҙе рәхимһеҙ иҙеүҙәрен, улар хеҙмәте менән байығыуҙарын («Энә менән ep»), батша судының ғәҙел булмауын, уның ике йөҙләлөгөн («Һарыҡты кем ашаған», «Үгеҙ менән бүре») асып күрһәтте, көсләләрҙең көсһөҙҙәрҙе иҙеүен, ҡыйырһытыуын, иҙелеүселәрҙең иҙеүселәргә ҡаршы көрәшенең ойошмаған булыуҙарын сағылдырҙы («Бесәй менән сысҡандар»). Ә инде «Һандуғастар», «Ыласын менән өйрәк» басняләрендә Ғафури Англия-Америка империалистәренең Яҡын Көнсығышта күрһәткән ҡомһоҙлоҡтарын аса, мосолман рухаиҙәренең ике йөҙләлөгөн фаш итә. «Ҡара йылан менән тәлмәрйендәр батшаһы» басняһендә шағир Англия империализменең ялсылары булған солтандарҙы, үҙ иле һәм халҡы алдында хыянат итеүсе шаһтарҙы фашлай.

Ғафури күп кенә басняләрен мораль һәм тәрбиә мәсьәләләренә ҡарата яҙған. «Ишәк», «Сиңерткә менән ҡымырҫҡалар», «Ҡорттар», «Ике себен», «Эт менән ҡуян», «Ҡәзә менән көҙгө» кеүек басняләрендә ул анра, ышаныусан һәм иҫке уйлы кешеләрҙе тәнҡит итә. Ул басняләр хәҙерге көндә лә ҡиммәтен юғалтмағандар. Сөнки шағир тарафынан тәнҡитләнгән еңел аҡыллылыҡ, бер ҡатлылыҡ, тупаҫлыҡ һәм башҡа шундай иҫкелек ҡалдыҡтары ҡайһы бер кешеләрҙең аңында һаман да йәшәп киләләр әле.





Ғафури бөйөк рус баснясеһе И. Крыловтан өйрәнде. Уның сатираһы, Крылов сатираһы кеүек үк, илдә хакимлек итеүсе тәртиптәргә ҡаршы, иҙеүселәрҙең деспотизменә, башбаштаҡлыҡтарына, ҡомһоҙлоҡтарына ҡаршы йүнәлдерелгән.

Ҡара реакция йылдары Ғафури ижадына йоғонто яһамай ҡалманы. Уның ҡайһы бер әҫәрҙәрендә реакция ҡыҫымы һөҙөмтәһендә килеп тыуған күңел төшөнкөлөгө, милләтселек мотивтәре ишетелеп ҡалдылар. Ғабдулла Туҡай, Ғәлиәскәр Камал 1910 йылда Ғафуриҙең «Милләт мөхәббәте» тигән йыйынтығында һәм милләт ҡыҙҙарына бағышланған шиғырҙарында хандарҙы һәм ислам динен идеаллаштырыу кеүек милләтсел хаталар булғаны өсөн шағирҙе дуҫтарса тәнҡит иттеләр. Ундай әҫәрҙәр Ғафуриҙең бөтә ижадына күләгә төшөрә алмайҙар, әлбиттә. Сөнки шағир нигеҙҙә революцион азатлыҡ идеяларына тоғро булып ҡала алды. Халыҡтың революцион көсөнә, революцион хәрәкәттең яңы күтәрелешенең ҡотолғоһоҙ булыуына, халыҡтың барыбер еңәсәгенә көслө ышаныу тойғоһо шағир күңеленән һис бер китмәне.

Мәжит Ғафури көткән революцион хәрәкәт күтәрелеше 1912 йылда килде. Шул тәьҫир аҫтында 1912—1914 йылдарҙа шағир тағы тормошто раҫлаусы, азатлыҡ, бәхет һәм һөйөү тураһында оптимизм рухы менән һуғарылған реалистик шиғыр һәм проза әҫәрҙәре яҙҙы. («Хәмиттең тормошо», «Мөхәббәт хаттары» һәм башҡалар.)

Ғафури «Алданмаҫтар», «Уйланыу», «Хәят юлында», «Көс» кеүек шиғырҙарында, халыҡ көрәшкә ҡыйыу һәм ышаныс менән ҡуҙғалһа — революцияның ҡара көстәре тар-мар ителәсәк, тигән фекерҙе үткәрә:

Һин хәят һуғышында ғәйрәт, һиммәтең итһәң күрәл,
Һис шикһеҙ еңеп сығырһың, сөнки юҡ еңелмәҫ хәл.
Саф батырлыҡ ҡаршыһында нимә бар теҙ сүкмәгән...
Тағы ла ҡуҙғал, тағы ла талпын, әле лә форсат үтмәгән!

(«Хәят юлында».)

Ғафури был йылдарҙа киләсәк социалистик обществоның һыҙаттарын күҙ алдына килтерә алмай ине, әлбиттә. Шуға уның яңы обществоны төҙөүгә саҡырыуҙары ла конкрет түгел ине. Шулай ҙа шағир буласаҡ яңы тормошта халыҡтар дуҫлығы буласағын, кешелеклелек, ғәҙеллек урынлашасағын һиҙенә ине:

Енә алмаҫ быны[1] һис башҡа ҡеүәт, сөнки был көслө,
Булыр шунда кешеләр һәммәһе нәҡ бер туған төҫлө.
Бөтөр шунда был көндәге хөсөд[2] һәм дә дошманлыҡ,
Тыуыр донъяға дуҫлыҡтар — бына шунда ысын инсаплыҡ.
Енеү, еңмәү һүҙе бөткәс, инер донъяға бик ҙур йәм,
Итермен шул ваҡытта мин ғәжәп шатлыҡ менән байрам.

(«Түгелгән йәш», 1912.)

Халыҡ көсөнә ышаныс, иҫке донъяның емереләсәген тойоу мотивтәре Ғафуриҙең империалистик һуғыш һәм февраль буржуаз-демократик революция йылдарындағы әҫәрҙәрендә тағы ла асығыраҡ сағылды. Быны шағирҙең түбәндәге шиғыр юлдары ла раҫлай ала:

Әй, ҡара көс, һин кешелек
Донъяһынан көлмә, кит!
Бер ваҡытта пыр туҙырһың,
Әйләнерһең көлгә һин!

Империалистик һуғыш башланыу менән буржуазия һәм руханиҙәр хеҙмәтсәндәрҙе алла исеменән һуғышҡа ҡыуа башланылар, ә Ғафури «Юҡтырһың да, алла» шиғырында алланың барлығын шик аҫтына алды, диндең өҫтөн синыфтарға хеҙмәт итеүен күрһәтте.

Матбуғатта был шиғырҙың сығыуы буржуазия һәм мосолман руханиҙәре араһында ғауға тыуҙырҙы. Алла исеменән байҙар, муллалар, купецтәр Ғафуриғә ләғнәт уҡынылар.

Февраль буржуаз-демократик революцияһы алдынан хеҙмәтсәндәр араһында һуғышҡа ҡаршы көрәш көсәйгәндән-көсәйә барҙы. Фронтта һалдаттар араһында ҡуҙғалыштар башланды. Был ваҡиғалар шағирҙәге һуғышҡа ҡаршы булған тойғоларҙы тәрәнәйтә барҙылар. Һуғыштың башындараҡ яҙылған «Һуғышта хәбәрһеҙ юғалған туғанға», «Ҡайғы», «Күңелһеҙ байрам», «Күңелһеҙ бер көндә» шиғырҙарында Ғафури империалистик һуғыштың халыҡты талау, бөлдөрөү һуғышы икәнен күрһәтеү менән генә сикләнһә, 1916 йылда яҙған

[1] Быны — халыҡтар дуҫлығын.
[2] Хөсөд ҡылыу — үсләшеү.





«Ул кем?» шиғырында инде ул һалдаттарҙы һуғышты туҡтатырға, «Барса эштәрҙән элек баш бул, туған, үҙ иркенә», тип һалдаттарҙы азатлыҡ яулап алырға саҡыра.

Февраль революцияһы йылдарында Ғафури ижадында демократик идея һәм халыҡсанлыҡ һыҙаттары тәрәнәйә төшәләр. Ул халыҡтың тыныслыҡ һәм икмәк өсөн талабын сағылдырған, революция хыянатсылары — меньшевик һәм эсерҙарҙы фашлаған, Керенский Ваҡытлы хөкүмәтенең империалистик асылын күрһәткән, хеҙмәтсәндәрҙе революция дошмандары менән ҡыйыу көрәшкә саҡырған байтаҡ шиғырҙар яҙҙы («Бөтһөн һуғыш!», «Икмәк!», «Аждаһа», «Революция ҡорбандарына», «Азатлыҡ иртәһе»).

Мәжит Ғафури Октябрь революцияһынан бер нисә ай элек, 1917 йылдың апрелендә, яҙылған «Ҡыҙыл байраҡ» шиғырында эшсе синыфының бөтә донъя тарихи ролен күрһәтте, ул күтәргән ҡыҙыл байраҡҡа ода йырланы, һәм шағир ғүмеренең һуңғы көнөнә саҡлы ана шул ҡыҙыл байраҡҡа тоғро булды.

Ҡара һин алға!
Күрәмһең унда:
Ҡыҙыл байраҡты
Буялған ҡанға.
Көслө эшселәр
Күтәргән уны.
Буялған уға
Шәһиттәр ҡаны.
Хөрлөк, тигеҙлек —
Уның шиғары.
Бөтә байраҡтан
Тора юғары.
Шунда хәҡиҡәт,
Шунда ысын иман,
Ҡуҙғал, эшселәр!
Таң ҡалһын йыһан.
...Әй ҡыҙыл байраҡ,
Нур бир йыһанға!
Әйҙә, эшселәр,
Алға вә алға!

Ғафуриҙең Октябргә тиклем булған ижадында башҡорт һәм татар халыҡтары араһында милли азатлыҡ хәрәкәте башланыуы, уларҙың ирк өсөн көрәше, рус халҡы менән дуҫлыҡ идеялары сағылды. Был яғы менән Ғафури ижады хеҙмәтсәндәрҙе революцион рухта тәрбиәләүҙә, иҙеүселәргә ҡаршы нәфрәт көсәйтеүҙә ҙур роль уйнаны.

Ғафури үҙенең Октябргә тиклем ижады менән Башҡортостандағы әҙәби башланыштарҙың үҙәгендә торҙо, асылда был процестең юнәлешен һәм төп практикаһын билдәләне.

# III. GLOSSARY

# GLOSSARY

The Bashkir words are given in the following alphabetical order: а, б, в, г, ғ, д, ҙ, е, ё, ж, з, и, й, к, ҡ, л, м, н, ң, о, ө, п, р, с, ҫ, т, у, ү, ф, х, һ, ц, ч, ш, щ, ъ, ы, ь, э, ә, ю, я.

## ABBREVIATIONS

| | |
|---|---|
| abbrev. | abbreviation |
| abl. | ablative |
| acc. | accusative |
| adv. | adverb |
| Ar. | Arabic |
| caus. | causative |
| dat. | dative |
| fem. | feminine |
| gen. | genitive |
| ger. | gerund |
| interj. | interjection |
| intr. | intransitive |
| ling. | linguistics, term used in linguistics |
| loc. | locative |
| masc. | masculine |
| n. | noun |
| pass. | passive |
| Pers. | Persian |
| pers. | person |
| pers. pron. | personal pronoun |
| pl. | plural |
| postp. | postposition |
| pron. | pronoun |

| | |
|---|---|
| pr. n. | proper noun |
| Rus. | Russian |
| sing. | singular |
| suff. | suffix |
| trans. | transitive |

The pure-relational forms (case forms) have the following names here:

| | |
|---|---|
| abl. | ablative ("from") |
| acc. | accusative (direct object) |
| dat. | dative ("to") |
| gen. | genitive ("of") |
| loc. | locative ("in, at") |

## -A-

Абдуллино  Abdullino (town)

август  August

авиация  aviation

автономия  autonomy

автономиялы  autonomous

автор  author

ағартыу  verbal noun of ағарт-; enlightenment; education

ағас  tree; wood; timber

административ  administrative

аҙ  little; scarce; few

аҙаҡ  end

аҙаҡ килеп  ultimately, finally; towards the end; in the end

аҙмы-күпме  more or less; to a certain degree

аҙыҡ  food; provisions

ажғыр-  to rage; become enraged; be furious

аждаһа  dragon

азат  free; freeborn

азатлыҡ  freedom; emancipation

азатлыҡҡа сыҡ-  to become emancipated

азбуковник  primer (Rus.); elementary textbook

ай  moon; month

айҡанлы  because of; on the occasion of (postp.)

айыр-  to separate; set apart; differentiate; distinguish

айырма  diversity; difference; distinction

айырыл-  pass. of айыр-; to separate, branch off; to evolve; develop from



айырылыш  separation; difference

айырым  separate; different

айырыу  verbal noun of айыр-

айырыуса  particularly; especially

академия  academy

актив  active; actively

активлек  activity; being active

аҡ  white

аҡ-  to flow; float

аҡгвардеец  White Guardsman (Rus.)

аҡыл  intellect, reason; mind

аҡыллыҡ  prudence; wisdom

ал-  to take; get; buy; obtain; start from; with the gerund in -ә, -й, -а "to be able to"

алға  forward; forth

алға кит-  to go forward; to progress, develop

алда-  to deceive

алдан-  pass. of алда-

алдынан  before

алдынғы  before (adj.); leading; foremost; advanced

алдында  at; before; in front of

алдындағы  at; before; in front of (adj.)

Алла  God

алты  six

алтын  gold

алым  device; method

алып  ger. of ал-; from, starting from

алып бар-  to take to; undertake; deliver

алып барыл-  pass. of алып бар-

алып кил-  to bring

алып ташла-  to throw off; discard

алырҙай  participle in /-r/ + particle дай, ҙай, etc., from ал- to get: as though getting, receiving

алыҫ  far; distant

алыҫлыҡ  remoteness; distance

алыу  verbal noun of ал-

амбар  barn; granary

Америка  America

амин  certain; secure; positive

ана шул  that; that one there

Англия  England

аң  consciousness; perception

аң-белем  knowledge; education

аңла-  to understand

аңлап ет-  to comprehend; understand

аңлат-  caus. of аңла-; to explain

аңлатыу  verbal noun of аңлат-; explanation; clarification

аңлау  verbal noun of аңла-

аңра  stupid, slow; dull-witted; simple

аптыра-  to be confused, perplexed

ара  space between; interval; with possessive suffixes: between; among

аралаштыр-  to mix; involve

араһынан from the middle of; from; from among; see ара

араһында between; among; see ара

Арғаяш Argayash (city)

арҡа back

арҡаһында at the back of; because of, in consequence of

армия army

арт back part; back, rear

арт- to increase (intr.)

артабан later on, further (adv.)

артабанғы further (adj.)

артист actor, artist (masc.)

артистка actress, artist (fem.)

артта ҡал- to remain behind; lag

артта ҡалған participle of артта ҡал-; lagging

артта ҡалыу verbal noun of артта ҡал-; the lagging behind, backwardness

артталыҡ lagging; backwardness

артыҡ superfluous; in excess; more; more than; especial

артынан from behind; after; see арт

артыу verbal noun of арт-

архив archives

аръяғында on that side of, outside of; see аръяҡ

аръяҡ beyond (noun); other side

ары- to become tired

арымай-талмай tirelessly; untiring(ly)

арыҫлан lion

арыҫландай lion-like; similar to a lion

ас hungry

ас- to open; reveal; explain

аслыҡ hunger

ассортимент assortment

А.С.С.Р. Autonomous Soviet Socialist Republic (Rus. abbrev.)

асыҡ open; clear; clearly

асыҡла- to determine; clarify

асыҡлан- pass. of асыҡла-; to become clear; to be clarified

асыҡлыҡ clarity; sincerity

асыл substance; essence; source; origin

асылда in essence; essentially

асыл- pass. of ас-; to be opened

асылыу verbal noun of асыл-

асыу verbal noun of ас-

аҫ(т) lower part; downstairs

аҫтына below; under; see аҫ(т)

аҫтында below; under; see аҫ(т)

ат 1. name

ат 2. horse, steed

ат- to throw; shoot (at)

ата father

ата- to name

ат ҡаҙанған one who has made a name; of distinguished service: from ат ҡаҙан- to deserve a name



аттыр- causative of ат-

атыл- pass. of ат-; to rush; throw oneself at

атыу verbal noun of ат-

ауыҙ mouth

ауыҙ-тел ижады oral literature, folklore

ауыл village

ауыл хужалығы agriculture

ауыр heavy; difficult

ауырлыҡ heaviness; difficulty; weight

ахыр end

аш- to overflow, to rise above, to exceed

аша over; through; by means of (postp.)

аша- to eat

ашамлыҡ food; dish; course; provisions

ая- to spare; pity

аяҡ foot; leg

аяҡҡынам: аяҡ + particle ғына/ҡына + poss. suff. of 1st p. -м my: my feet

аяҡлы with feet, legs; -footed

-Б-

бағышла- to destine; dedicate; devote

бағышлан- pass. of бағышла-

база basis

бай wealthy; rich; plentiful; owner; wealthy man

байлыҡ wealth; richness

байраҡ flag, banner

байрам holiday; festival

байрам ит- to observe a holiday; celebrate

байтаҡ considerably; considerable amount or number

байығыу verbal noun of байыҡ-

байыҡ- to become wealthy

баҡса garden

Баҡсаһарай Bakhchisarai, city in Crimea

бал honey

бал ҡорто bee

бала child

балдай as sweet as honey

балет ballet

балҡы- to sparkle; shine

бар is; there is; there are; present

бар- to go; start from; continue; with the ger. in ә-, -й, -а describes a repeated or continuous action

барлыҡ existence; presence

барлыҡҡа кил- to come into existence

бары only

бары тик merely; only; just

барыбер yet; anyhow; nevertheless; anyway; somehow; indifferently

барып ҡайт- to go and return; to visit; pay a visit

барыу verbal noun of бар-

барыһы all (of this, of these); see бар

барыһынан элек most of all; first

барыш verbal noun of бар-; rate; course; development

басня fable (Rus.)

баснясе writer of fables (Rus.)

Б.А.С.С.Р. Bashkir Autonomous Soviet Socialist Republic (Rus. abbrev.)

баҫ- to step; tread; press; print

баҫҡыс step; stairs; stage (in a development)

баҫма print; printed

баҫтыр- caus. of баҫ-

баҫтырыл- pass. of баҫтыр-; to become subdued; be pressed

баҫыл- pass. of баҫ-; to be printed

баҫылып сыҡ- to be published

баҫып сығар- to publish

баҫып сығарыу verbal noun of баҫып сығар-; publication

батрак hired laborer (Rus.)

батша sovereign; ruler; king; czar

батыр brave; hero

батыр- to submerge; drown; thrust into

батырлыҡ bravery; heroism

баһадир hero; knight

баһала- to estimate, appraise; to esteem, appreciate, to value

баш head; beginning; chief; master; top; peak

баш-баштаҡлыҡ arbitrariness; wilfulness

башҡа other; different

башҡала capital city

Башҡорт Bashkir (n., adj.)

Башҡортостан Bashkir country

башла- to begin

башлан- pass. of башла-; to begin (intr.)

башланыу verbal noun of башлан-

башланыш beginning

башлау verbal noun of башла-; beginning

башлыҡ head; chief

башревком Bashkir revolutionary committee (Rus. abbrev.)

башта at first; first

беҙ pers. pron. we

беҙҙең gen. of беҙ; our

бейек high

бейеклек altitude; height

бел- to know

белдер- to make known

белдерел- pass. of белдер-

белем knowledge; education

белеү verbal noun of бел-; knowledge; understanding



Белорет Beloretsk (town)

бер one; a; one and the same; once

бер ҡатлылыҡ simplicity; artlessness; naiveté

бер нисә a few; several

бер рәттән in a row; along (with)

бер туған related by birth; kin

бер-береһен each other; one another

бергә together

бергәләп together; joint; jointly

берҙәм closely-bound; single; unanimous; united

берҙәмлек closeness; unanimity

беренсе first

беренсе тапҡыр first time; for the first time

береһе one (of); any; an individual

берләш- to unite; be united

берәй some; a; any

берәм-берәм singly; one by one; one at a time

берәмек alone; individual

бесәй cat; feline

библиографик bibliographic

бигерәк excessively; specially; extremely

бигерәк тә exceptionally; particularly

бик very; very much; excellent; excessively; extremely

билдәле known; certain

билдәлә- to make a mark; mark; determine; indicate; set; mention; specify

билдәләү verbal noun of билдәлә-

билдәләүсе that makes a mark; marking; determining; specifying

бир- to give

бирел- pass. of бир-

бирелгәнлек attachment; devotion; loyalty

биреү verbal noun of бир-

биш five

биш йыллыҡ five year period; five year plan

боевой combat (as adjective), militant (Rus. adj.)

бөжәк insect

бөйөк great

бөл- to become ruined, impoverished

бөлгөнлөк ruin; destruction; devastation

бөлдөр- caus. of бөл-; to ruin; cause poverty

бөлдөрөү verbal noun of бөлдөр-

бөркөт eagle

бөркөттәй eagle-like; similar to an eagle; heroic

Бөрө Bőrő (Rus. Birsk) (town)

бөт- to end; come to an end; be completed

бөтөр- to end; abolish

бөтөрөл- pass. of бөтөр

бөтә  whole; entire; all

бөтәһе  all of; total

бригадир  brigadier; head of a team of workers

буй  length; stature; extent

буйһон-  to submit oneself; be subordinated

буйһоноусанлыҡ  submission; obedience

буйы  during; see буй

буйына  during; along; see буй

буйынса  through; along; according to; concerning; by means of; with regard to

бул-  to be; become

буласаҡ  participle of бул-; future

булған  participle of бул-; all (dialect)

булмау  verbal noun, neg. form, of бул-

булдыр-  to create; bring into existence

булдырыл-  pass. of булдыр-

булдырыу  verbal noun of булдыр-

булмағанлыҡ  verbal noun in -лыҡ added to булмаған, participle of the negative verb булма-, see бул-; absence

булып үт-  to occur; take place; to pass, to cease to be

булыу  verbal noun of бул-; being; existence

булышлыҡ  aid; help

булышлыҡ ит-  to aid; help

буран  snowstorm

буржуаз  bourgeois (Rus.)

буржуазия  bourgeoisie (Rus.)

бурыс  debt; duty; task; obligation

бурыслы  indebted; obliged

буя-  to paint; dye

буял-  pass. of буя-

буяулы  painted; colorful

буяу  paint

бүл-  to divide

бүлгелә-  to sever; divide, partition

бүлгеләү  verbal noun of бүлгелә-; partition

бүлен-  pass. of бүл-

бүленеү  verbal noun of бүлен-; division; separation

бүленеш  division

бүре  wolf

быға  pron. dat. of был

был  this; above mentioned

был хаҡта  concerning this; in this respect

былай  in such a manner; so; thus

былар  these

бына  this is; here is

бында  here

бындай  such; thus

быны  pron. acc. of был

быуат  century

бәғзе  some

бәғзеһе  some of

Бәҙри  pr. n. (fem.)



бәйле  tied; relating to; concerned with (with dat.); dependent

бәйлә-  to tie; connect; relate; concern

бәйлән-  pass. of бәйлә-; to badger, find fault with

бәйләнеш  tie; bond; dependence

бәлки  perhaps; but

Бәләбәй  Belebei (city)

бәләкәй  small; somewhat; a little

бәрәс  young of a sheep or goat

бәхет  happiness; luck; prosperity

бәһлеүән  athlete; hero

бәһлеүәнлек  bravery

бюджет  budget

-В-

ваҡиға  occurrence; event

ваҡыт  time

ваҡытлы  temporary; in time; on time

валовой  gross (adj. Rus.)

ватан  native country; motherland

ватандаш  compatriot; countryman

великорус  Great Russian (Rus.)

Верхне-Урал  Verkhne-Ural (Rus.), Upper Urals

верховный  supreme (Rus.)

вклад  contribution; deposit (Rus.)

власть (власе)  authority; rule (Rus.)

воин  warrior (Rus.)

Волга  Volga river

волость  district (Rus.)

вуз  higher educational institution (Rus. abbrev.)

вәкил  representative; deputy

вәлидовсы  "Validovist", i. e., member of the Zeki Velidi group, a nationalistic group which led an anti-Soviet uprising in the Bashkir country in 1920.

-Г-

газета  newspaper (Rus.)

гвардеец  guardsman (Rus.), member or soldier of the guards

гвардия  guard; guards (Rus.)

генә  see ғына

география  geography

герб  coat of arms (Rus.)

Германия  Germany

героик  heroic; heroically

герой  hero

гидроэлектростанция  hydro-electric power station (Rus.)

государство  state; country (Rus.)

гөл  flower; rose

гражданин  citizen (Rus.)

граждандар civil; social (Rus.); citizens (plural)

губерна province (Rus.)

гуманизм humanism

гүзәл beautiful

гүзәллек beauty

гүйә as though

-Ғ-

ғауға noise, commotion, tumult; quarrel

ғашиҡ lover; minstrel

ғилем knowledge; science

ғилми scientific

ғинуар January (Rus. in the XVIII cent.)

ғөмүмән generally; in general

ғүмер life

ғына only; somewhat; rather

Ғәбделмәжит pr. n. (masc.)

ғәҙел just; justly

ғәҙеллек justice

ғәҙелһеҙлек injustice

ғәҙәт custom; habit

ғәҙәттән тыш extraordinary; uncommon

ғәжәп strange; amazing; wondrous

ғәйеплә- to accuse

ғәйрәт zeal; energy; courage

ғәйрәтлелек energy; daring; courage

ғәмәл action; use; practice; deed

ғәмәлдән сығар- to withdraw from use; discontinue

ғәрәп Arab; Arabic

-Д-

да see дә

даими constant; permanent; perpetual

дан fame; honor; glory; praise

данла- to make famous; glorify; praise

данлау verbal noun of данла-

данлы renown; glorious

дауам continuation

дауам ит- to continue

дауам иттереүсе continuator; successor

дауам итеүсе continuing; continuator

Девичий монастырь the Devichii (Virgins') Monastery in Moscow (Rus.); built in 1524

декабрь (-ре) December

декларация declaration

декрет decree; edict

делегация delegation



демократик democratic

демонстрация demonstration

деспотизм despotism

дивизия division (military)

дин religion

дини pertaining to religion; religious

диниә pertaining to religion, matters pertaining to religion (Ar. pl.)

доға prayer

доға ҡыл- to pray

доклад report (Rus.)

документаль documentary

донъя world

донъяға ҡараш attitude; outlook; weltanschaung

дошман enemy; foe

дошманлыҡ enmity; hostility

дөйөм all; general; total; entire

дөйөмләштер- to generalize; socialize (calque from Rus.)

дөйөмләштерел- pass. of дөйөмләштер-

дөйә camel

дөрөҫ true; truly; correct(ly); faithful(ly); truth

дума duma (Rus.), council, assembly

дупла- to tan

дуҫ friend

дуҫлаш- to become friends (with)

дуҫлыҡ accord; friendship

дуҫтарса in a friendly manner

дә also; and; even; with the conditional tense "although"

дәғүә claim; pretension; assertion

дәғүә ит- to claim; pretend; assert

дәрес lesson

дәрәжә degree; measure

дәүер era, period

-Ҙ-

ҙа see дә

ҙур large; big; great

ҙә see дә

-Е-

ебәр- to send

егерме twenty

егерме биш twenty five

егерме бишләп twenty-five or so; about twenty five

егет lad; young man; brave

ейән grandson

елем glue

елкә back of the head, nape, and part of the shoulders; rear, rear line (military)

елкәһендә ал- to shoulder

емер- to destroy

емерел- to go to pieces, fall apart

емерелеү verbal noun of емерел-; destruction

емерелеүгә осра- to be destroyed, crushed

ең- to conquer; win

еңел light; light-weight

еңел аҡыллылыҡ thoughtlessness; levity; imprudence

еңел- pass. of ең-

еңелмәҫлек invincibility; invincible

еңеү verbal noun of ең-; victory

еңмәү verbal noun of еңмә- negative form of ең-

еп thread

ер ground; land; earth; place

ет- to suffice; ripen; reach; achieve; attain

етем orphan

етем ҡал- to become an orphan

етештер- to produce

етештереү verbal noun of етештер-; production

еткер- to bring to; complete

еткереү verbal noun of еткер-

етәксе head; chief; leading; foremost

етәкселек headship; guide; leadership

етәкселек ит- to exercise leadership; lead

-Ж-

жанр genre (through Rus.)

журнал journal; magazine

-З-

забастовка strike (Rus.)

завод works, factory, plant (Rus.)

закон law, statute (Rus.)

залог pledge, guarantee (Rus.)

заман time

заманында at the time of; in his, her, its time

зар complaint; grief

зарар harm; loss; injury

зарарлы harmful; inflicting harm; damaging; causing loss



зодчество architecture; sculpture, (Rus.)

Зөләйхә pr. n. (fem.)

Зөһрә Venus (planet)

-И-

и- to be

Ибраһим pr. n. Ibrahim, Arabic equivalent of Abraham; the patriarch Abraham

иғлан announcement; declaration

иғлан ит- to announce; declare

иғлан ител- pass. of иғлан ит-

иғтибар attention

идара administration; office

идара ит- to administer; be in charge of; manage

идеал ideal

идеалистик idealistic

идеаллаштыр- to idealize

идеаллаштырыл- pass. of идеаллаштыр-

идеаллаштырыу idealization

идеологик ideological

идеология ideology

идея idea

иҙ- to press; oppress

иҙел- pass. of иҙ-

иҙелеү verbal noun of иҙел-; oppression

иҙелеүсе oppressed

иҙеү verbal noun of иҙ-; pressure; oppression

иҙеүсе pressing; oppressor

ижад creation; creativeness

ижади creative

изге sacred

изгелек benefaction; beneficence; goodness

изгелек күрһәтеүсе benefactor; beneficent; imbibed with goodness

издательство publishing house (Rus.)

ике two

ике йөҙлөлөк duplicity

икенсе second; other

икмәк bread

икән past participle of the defective verb и-; having been; was; it appears that; probably

икәнлек participle of и- + -лек; being

ил country; land; homeland; state

ила- to weep; cry

илбаҫар aggressor; invader

иман belief; faith

империализм imperialism

империалист imperialist (n.)

империалистик imperialistic

импровизатор improvisator

ин- to go in; enter

инде now; already; but

индер- caus. of ин-; to bring in; introduce; register; record; write in; add

индерел- pass. of индер-

индереү verbal noun of индер-

индивидуаллəштер- to individualize; characterize

индустриялаштыр- to industrialize

индустриялаштырыу industrialization

инеү verbal noun of ин-

инициатива initiative

инсанлыҡ humanity; humane attitude

институт institute

интек- to become weary; suffer

интеллигенция intelligentsia

интерес interest

иң most; forms the superlative of an adjective

ир male; husband; man

ireш- to reach; attain (with dat.)

ирк will; freedom

иркле free

иртə morning; early

исем name

исемендəге named; named after

исеменəн in the name of; on behalf of; for the sake of

искусство art; craft (Rus.)

ислам Islam

иҫ perception; remembrance; feeling; sentiment

иҫ кит- to be surprised, baffled

иҫ киткес surprising; baffling

иҫке old

иҫкелек oldness; survivals

иҫəп calculation; number; registration

иҫəпкə ал- to calculate; register; take into account

иҫəпкə алын- pass. of иҫəпкə ал-

иҫəплə- to count; calculate; consider

иҫəплəн- pass. of иҫəплə-

ит- to do; make

ител- pass. of ит-

итеү verbal noun of ит-

ихтыяж want; need

ишан head of a religious order; ascetic

ишек door; gate

ишек төбө space before the door

Ишембай Ishembai (town)

ишет- to hear

ишетел- pass. of ишет-

Ишмөхəмəт pr. n. (masc.)

ишəк donkey

июнь June



-Й-

йоғонто influence

йоғонто яһа- to influence (with dat.)

йондоҙ star

йорт dwelling; house; home

йөҙ 1. face; surface

йөҙ 2. hundred

йөҙ- to swim

йөҙəрлəгəн hundreds (of)

йөкмəтке content; contents

йөр- to go; walk; proceed

йөрөт- caus. of йөр-; to carry; carry about; take to

йөрөтөл- pass. of йөрөт-; to be carried; be current; to be valid

йөрəк heart

йығыу verbal noun of йыҡ-

йыйна- to collect; gather

йыйнау verbal noun of йыйна-; gathering, collection

йыйынтыҡ collection; anthology

йыҡ- to overturn; vanquish

йыл year

йылан snake; serpent

йылғы year (adj.)

йылдам rapid; quick; agile; lively

йыллыҡ yearly; annually; anniversary

йылылыҡ heat; warmth

йылылыҡ электр станцияһы thermoelectric power station

йыр song; folksong

йырла- to sing; sing about (with acc.); glorify

йырлау verbal noun of йырла-

йырсы singer; folksinger

йыһан world, universe

йыш often

йəберлə- to oppress; injure

йəберлəн- pass. of йəберлə-

йəғни that is to say; i. e.

йəдитсе Jadidist, a member of the Jadid movement

йə, , .йə either... or

йəдитселек Jadidism, the Jadid movement, a progressive cultural and political movement of the Tatars and other Turks, founded by Gasparalı (1851-1914)

йəки or

йəллə- to pity; feel sorry (for)

йəм beauty

Йəмилə pr. n. (fem.)

йəн soul; life

йән аямай not sparing one's own life

йәнле alive; lively

йәһәт fluently; quickly; fast

йәш 1. young; year (of age)

йәш 2. tear

йәшләй at a young age

йәшә- to live; exist

йәшәп кил- to exist; stay at; live

йәшәп килеүсе existing

йәшәүсе dweller; inhabiting; inhabitant

-К-

кавалерия cavalry

Кавказ Caucasus

Кавказ арты Transcaucasia

кадет cadet

кадет корпусы military school

кадр cadre

казак Cossack (Rus.)

кантон canton

капитализм capitalism

капиталист capitalist

капиталистик capitalist (adj.)

картина picture; painting; image (Rus.)

кеби as; like; similar to; as though (postp. with dat.)

кейҙер- to put on; dress

кенә see ғына

кем who; whoever

Керенский, А. Ф. Kerensky, A. F. (born 1881), Russian prime minister (July 1917) until the Bolshevik revolution (Nov. 1917)

кесерәй- to diminish; abate

кескәй small

кескәй генә minute; small

кеүек as; like; similar to (postp.)

кеүек үк as; as well as

кеше person; someone; human being

кешелек humanity

кешелек донъяһы humankind; humanity

кешелеклелек humaneness; humanity

кешеләр pl. of кеше; persons; people

Киев Kiev (city)

кил- to come; aspect verb describing
1) a completed action, or
2) a continuous or repeated action, provided that the main verb is a verb of motion

килеп ет- to come as far as, up to; reach; arrive

килеш- to come to an agreement; agree; fit

килешеү verbal noun of килеш-; agreement



килешеүсәнлек conciliation; conciliatoriness

килтер- to bring

килтереүсе bringing; who brings

киләсәк participle in -әсәк of кил-; future; in future (adj.)

киләсәктәге future (adj.)

кимәл level

киң wide; broad

киңәйт- to widen; expand; develop

киңәйтел- pass. of киңәйт-

кире back; reverse

кит- to go; proceed

китап book

классик classic; classical

коллективлаштер- to collectivize

коллективлаштереү collectivization

колониаль colonial

колония colony

колхоз kolkhoz, collective farm (Russ. abbrev.)

команда command; crew

комитет committee

комиссар commissar

комиссия commission; committee

коммуналь communal

коммунизм communism

коммунист communist

коммунистик communistic

компактлы compact

композитор composer

конкрет specific; concrete

конституция constitution

контакт contact

контроль control

корпус corps

корреспондент correspondent; reporter

көҙгө mirror

көл ashes; ash-colored

көл- to laugh; laugh at

көн day

көнкүреш existence; mode of life

көнсығыш east; eastern

көрә- to scrape; shovel

көрәш struggle; conflict; fight

көрәш- to struggle; fight; strive

көрәшеүсе one who struggles, fights; fighter

көс strength; force; power; effort

көс һал- to exert oneself; take pains

көс һалыу verbal noun of көс һал-; exertion; taking pains; effort

көслө strong; with strength; powerful; strongly; powerfully

көсһөҙ without strength; weak

көсәй- to become strengthened; become increased

көсәйгәндән-көсәйә strengthened; increasingly

көсәйеү verbal noun of көсәй-

көсәйт- to strengthen

көсәйтеү verbal noun of көсәйт-

көт- to await; graze (tr.)

К.П.С.С. communist party of the Soviet Union (Rus. abbrev.)

край edge; region (Rus.)

Крылов, И. А. Krylov, I. A. (1768-1844), Rus. fabulist

крәҫтиән peasant (Rus.)

кулак 1) prior to 1917: a prosperous peasant in Russia often associated with gaining profit from non-agricultural activities;
2) after 1917: a farmer chacterized by communists as having excessive wealth and ability to hire laborers and, therefore, subjected to penalties (deportation, confiscation of all his property, and loss of all civil rights)

культура culture

культураһыҙлыҡ lack of culture; bad manners; lack of education

купец merchant (Rus.)

күберәк comparative of күп: more; mostly

күгәр- to be blue, sky-blue

күҙ eye

күҙ алдына килтер- to imagine; fancy; think of; bring to mind

күҙ алдында тот- to mean; imply; have in mind

күҙлегенән сығып ҡарағанда from the point of view (of)

күҙлек glasses, spectacles

күҙәт- to watch; observe; survey

күҙәтеү verbal noun of күҙәт-; review; observation; survey

күҙәтеүсе one who watches, aims at

күк sky; heaven

күлдәк shirt

күләгә shadow; shade

күләгә төшөр- to cast shadow

күләм scale; measure; volume

күмер charcoal; coal

Күмертау Kumertau (town)

күңел soul; affection; spirit; feelings; mood

күңел төшөнкөлөгө despondency; melancholy

күңел төшөнлөгөнә бирел- to become despondent, melancholy

күңеллелек hilarity; merriment; cheerfulness

күңелһеҙ boredom; melancholy; dreary; boring; sad; lifelessly

күп many; much

күп милләтле multinational

күперт- to produce foam; exaggerate

күпертел- pass. of күперт-

күптәр many

күр- to see

күрен- to be seen; appear

күренгелә- to be seen occasionally; appear from time to time

күренекле significant; notable



күренеү verbal noun of күрен-

күренеш appearance; occurrence; manifestation; phenomenon; event; development; aspect

күрк ornament

күрһәт- to show, demonstrate; indicate; make mention of; affect

күрһәтел- pass. of күрһәт-

күрһәтелеү verbal noun of күрһәтел-

күрһәтеү verbal noun of күрһәт-

күрше neighbor; neighboring

күрә алма- to hate; see күр-, ал-

күрә ger. of күр-; seeing; according to, because of (postp. with dat.)

күс- to move (intr.); be transferred

күсер- to move; transfer; assign

күсерел- pass. of күсер-

күтәр- to raise; lift; bring up

күтәрел- pass. of күтәр-; to be raised; rise; go up; ascend; emerge; appear

күтәрелеү verbal noun of күтәрел-

күтәрелеш see күтәрелеү; rise; ascent

күтәреү verbal noun of күтәр-

кәзә goat

кәрәк necessary

кәрәкле necessary

кәрәклек necessity; need

кәүҙә body; trunk; corpse

кәүҙәлән- to be embodied; be reflected; appear

кәүҙәләндереүсе one who embodies; reflecting; describing

-Ҡ-

ҡағылыш relationship

ҡағылышлы булған concerned (with); with relation to

ҡаҙан- to gain; earn; win

ҡаҙаныш gain; achievement; merit

Ҡаҙан Kazan, capital of the Tatar republic

ҡаҙый Cadi; Moslem judge

ҡайғы grief; sorrow

ҡайт- to return

ҡайтанан again; anew

ҡайтанан ҡороу reconstruction

ҡайһы which, which one; whichever

ҡайһы бер some; certain

ҡал- to remain; aspect verb describing a completed action

ҡала city; town

ҡалған participle in -ған of ҡал-; remaining

ҡалдыҡ remainder; survival

ҡалдыр- to leave; leave out; abandon

ҡалмай...ә not only... but also

ҡамасаула- to hinder; disturb

ҡан blood

ҡапма-ҡаршы in contrast; contrasting

ҡар snow; snowy

ҡара black; dark

ҡара эшсе unskilled workman; laborer

ҡара- to look; look at

ҡарағанда loc. of the participle in -ған of ҡара-; in comparison with (postp. with dat.)

ҡарамаҡ look; opinion; authority

